ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

5-11 сентябрь (һарысай) 2015

№36 (662)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡасаҡтар ағымы...**

Европаны баҫып алды



5

**Тарих ҡабатланамы?**

Йәки XX быуат башында башҡорттарҙың Францияла эшләгәне тураһында



7

**Мәскәү ғалимдары баһаланы...**



башҡорт ырыуҙары тураһындағы күп томлыҡты 8-9,12

**Бурыстарым бар...**

уларҙы тормошҡа ашырыу юлындамын



11

**ТВ-программа** 14

*Башҡорттар - ҡатын-ҡыҙға ҡарата мөнәсәбәтендә иҫ киткес әхлаҡи саф халыҡ. Башҡорттарҙың тағы ла үҙенсәлекле сифаттары - уларҙың тыумыштан килгән нымыҫлылығы, башҡаларҙың кешелек дәрәжәһен ихтирам итеү ғәҙәте һәм шуны үҙҙәренә ҡарата ла һаҡларға тырышыуҙары.*

*Д.П. Никольский.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сит ил тауарҙарын юҡ итеүгә бәйле ниндәй уй-фекерҙәрегеҙ булыр?

***Сәүиә ҒАРИФЙӘНОВА, өй хужабикәһе, Хәйбулла районы:*** Бала саҡтан аҙыҡты тәләфләмәҫкә, икмәктең валсығын да төшөрмәҫкә өйрәнеп үҫкән быуынға был хәлде аңлауы ла, ҡабул итеүе лә ауыр. Нисек баҙнат итеп аҙыҡ-түлекте трактор менән иҙгеслəргә мөмкин һуң? Әсәйемдең һуғыш ваҡытындағы, унан һуңғы йылдарҙағы аслыҡ тураһында һөйләгәндәрен иҫләйем дә, бөгөнгө аҙыҡ-түлеккә булған ҡарашты күреп йәнем әсей.

Беҙ, бәлки, эштең айышына ныҡлап төшөнөп тә етмәйбеҙҙер, ләкин бында сәйәси моменттың көслө икәнен аңлайбыҙ. Өҫтәге түрәләр бөтә яҡлап уйлап, бөгөнгө көндө генә түгел, ә күпкә алдағы ваҡытты күҙ уңында тотоп бындай аҙымға бараларҙыр, тип уйлайым. Шулай ҙа Рәсәйҙә, бөтә Ер шарында күпме кешенең ас тереклек итеүе, бер һыныҡ икмәккә зар-интизар булыуы барыбыҙға ла мәғлүм. Әгәр ҙә юҡ ителергә тейешле тауарҙы уларға таратып биргәндә, нисек булыр ине икән, тигән фекерҙәр ҙә тыуа башта. Ләкин бындай эшмәкәрлек власть органдары араһында үҙенең вәкиллек хоҡуҡтарынан ситкә сығыусыларҙы арттырмаҫ, тимә. Шулай уҡ ул тауарҙың кемгә, күпме, ни рәүешле бүленергә тейешлеген билдәләгәнсе лә әллә күпме ваҡыт үтәсәктер.

Юҡ ителгән аҙыҡ-түлектә, хәҙер килеп хатта сәскәлә һәм көнкүреш химияһында ла һаулыҡ өсөн зарарлы ҡушылмалар, матдәләр күп булыуы ошондай аҙымға барырға мәжбүр итә, тип ишеттем. Ә ошоға тиклем ул зарарлы матдәләрҙә бер кемдең дә эше булмағанмы, әллә уларҙы яңы ғына ҡуша башлағандармы?

Рәсәйгә индереүгә тыйылған аҙыҡ-түлек араһында төрлө сөтләүектәр, банан, финик, инжир, моллюскалар һәм ҡыҫала һымаҡтарҙың булыуына артыҡ аптырамайым. Ләкин улар араһында үҙебеҙҙә лә рәхәтләнеп үҫтереп, етештереп булған һөт һәм һөт аҙыҡтарын, һуған, кәбеҫтә, кишер һәм башҡа емешеләкте күреү аптырауға һала. Ауыл хужалығы киң үҫешкән ил булараҡ, Рәсәй халҡын тәьмин итерлек йәшелсәемеш үҫтерә алмайбыҙмы икән ни? Әллә үҙебеҙҙә үҫкәнен башҡа илдәргә оҙатып, үҙебеҙгә ашарға сит илдән һатып алыу күпкә отошлораҡмы? Ғөмүмән, был ҡарар һәм уны тормошҡа ашырыу юлдары күп һорауҙар тыуҙырҙы. Ҡасан да булһа уларға анығ аңлатмалар ишетербеҙ, тип ышанам.

Илгә индереү тыйылған аҙыҡ-түлекте юҡ итеү ҙә еңелдән түгел икәне көн кеүек асыҡ. Мәҫәлән, белгестәр белдереүенсә, пармезан сырын юҡ итеү өсөн уны махсус мобиль мейестәрҙә яндырырға кәрәк. Ләкин газда эшләүсе был мейестәр эш барышында атмосфераға бик күп зарарлы матдәләр бүлеп сығара. Шуға күрә экологияға килтерелгән зарарҙы кәметеү маҡсатында улар ҡыйбатлы фильтрҙар менән йыһазландырыла. Ә улар, үҙ сиратында, аҙаҡ юғары класлы хәүефле ҡалдыҡ булараҡ үтилләштерелә - был да ҙур сығымдар талап итә. Башҡа аҙыҡ-түлекте юҡ итеү ҙә осһоҙҙан түгел, тип белдерә эксперттар. Тимәк, әлеге эшмәкәрлектең әхлаҡи-этик йәһәттән генә түгел, ә финанс яҡтан да проблемалары булыуын инҡар итеп булмай. Шулай ҙа киләсәктә уның ыңғай яҡтарын һәм файҙаһын мотлаҡ күрербеҙ, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОТЛАЙБЫҘ!

## Белем көнө менән!

***Беренсе сентябрь тыуа***
***Үҙе башҡа йәм менән.***
***Туй, туй бөгөн, белем туйы,***
***Туй итәбеҙ ғәм менән.***

***Бар тәбиғәт уңыш йыя,***
***Ә мәктәптә - яҙ кеүек,***
***Ҡайҙа баҡма - гөл-сәскәләр,***
***Сәселә тик наҙ кеүек.***

***Яҙҙағылай эш башлана,***
***Орлоғо белем-ғилем,***
***Белемле бит иленең дә***
***Ныҡлыраҡ итә билен.***

***Ил-йорт өсөн ябай түгел,***
***Оло байрам ул - ысын!***
***Һәм был көндә һәр бер кеше***
***Күпмегәлер уҡыусы...***

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**



*Әйткәндәй, Беренсе сентябрь көнө Башҡортостанда бөтәһе 439 мең уҡыусы мәктәпкә барҙы, былтырғы йыл менән сағыштырғанда, быйыл уҡыусылар һаны 7,5 меңгә күберәк. Өфөлә генә 101 мең уҡыусы иҫәпләнә, уларҙың 12 меңе - 1 класҡа уҡырға килеүселәр.*

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ ЙӘМӘҒӘТ!

**1 сентябрҙән 2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы рәсми рәүештә старт алды. Сәмле, гәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Яңы хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Шулай итеп, 2015 йылдың икенсе яртыһы йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанциялары буйынса түбәндәгеләр:



Мәсетле районы Йонос ауылынан Сажидә Мөхәррәмова, Баймаҡ ҡалаһынан Рәшит Үтәев - **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**; Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Көнһылыу Насретдинова - **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**; Салауат районы Мөрсәлим ауылынан Миңзилә Ҡорбанғәлиева, Баймаҡ районы 2-се Әтҡол ауылынан Көнһылыу Сөләймәнова, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Вилдан Шәрипов - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**; Әбйәлил районы Атауҙы ауылынан Р. Замалетдинов, Учалы ҡалаһынан Йәүһәрә Шәрипова, Баймаҡ районы 2-се Әтҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Бүздәк районы Ҡаңлы-Төркәй ауылынан Мәхмүзә Шәғәлиева - **"Антология поэзии Башкортостана"**; Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан Зифа Ғүмәрова, Мәләүез районы Смаҡ ауылынан Рәйес Суҡбаев - **Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар"**; Ишембай ҡалаһынан Фәүзиә Аҡколова, Ишембай районы Әтҡол ауылынан А. Әбүбәкерова, Баймаҡ районы Ишей ауылынан Зианур Ҡарасурин, Ярат ауылынан Гөлсөм Мырҙабулатова, Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Мөнир Шәйхетдинов, Бишбүләк районы Елбулактамаҡ ауылынан Фәниә Ғатауллина, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Г. Айытҡолова, Учалы ҡалаһынан Нуретдиновтар, Әбйәлил районы Үрге Әбдрәш ауылынан Н. Хәсәйенова, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Низаметдинова - **Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы"**; Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан М. Фәтҡезаманов, Сәйетбаба ауылынан Ғиндулла Шәйәхмәтов, Учалы районы Истамғол ауылынан Ә. Ғәйетколова, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Р. Моратова, Баймаҡ ҡалаһынан М. Байрамғолов, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Рауза Рысмөхәмәтова, Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан Рита Шәйзуллина, Йылайыр районы Һуллантимер ауылынан Зөһрә Йәнсурина, Бөрйән районы Мәндәгол ауылынан Гөлназ Вәхитова, Шишмә районы Шишмә ҡасабаһынан С. Ҡуҙәшев, Мәләүез ҡалаһынан Рауза Хазиева, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Хәлиҙә Шәймәрҙәнова - **башҡортса "Дини календарь"**; Ишембай районы Ғүмәр ауылынан Э. Мәксүтова, Учалы ҡалаһынан Р. Абдуллина, З. Ғиззәтуллина, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Бөрйән районы Ҡолғана ауылынан Ш. Нуретдинова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Абдуллина, Салауат ҡалаһынан А. Солтанморатова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

**Дәртләндереү саралары дауам итә. Хәҙер инде 2016 йылдың беренсе яртыһына яҙылғандарҙан квитанциялар көтәбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сит ил тауарҙарын юҡ итеүгә бәйле ниндәй уй-фекерҙәрегеҙ булыр?



**(Башы 1-се биттә).**

***Ғәлим АҪЫЛБАЕВ, эшҡыуар:*** Был мәсьәләгә ҡарата бер төрлө генә фекер йөрөтөүе ауыр. Бер яҡтан ҡараһаң, аҙыҡ-түлекте юҡ итеү, тапау, иҙеү вәхшилек кеүек. Ләкин икенсе күҙлектән сығып һуҙ йөрөтһәң, һаулыҡ өсөн зарарлы тауарҙы магазин кәштәләренә сығарыуға юл ҡуйыу ҙа халыҡты мәсхәрәләгән һымаҡ. Президенттың әлеге указына тиклем, ҡануниәткә ярашлы, сик буйында тыйылған тауар тейәгән йөк машиналары хужаларына кире ҡайтарыла ине, йәғни сифатһыҙ тауар менән көрәшеү нәҡ бөгөн генә башланған эшмәкәрлек түгел. Ләкин әҙер тауарҙан килем алыуҙан кем ирекле рәүештә баш тартһын? Һәм сик буйынан боролған машиналарҙың күбеһе икенсе төрлө документтар аҫтында шул уҡ тауарҙы барыбер Рәсәйгә индереү әмәлен таба килделәр. Шуға күрә, ил башлығы матбуғат секретары Дмитрий Песков белдереүенсә, "был аҙымдың төп маҡсаты - граждандарҙың һаулығы тураһында ҡайғыртыу" икән, зарарлы тауарҙы ысын мәғәнәһендә юҡ итеү дөрөҫ һайланған юл, тип әйтергә мөмкин.

Унан һуң, ҡайһы бер илдәр беҙгә ҡарата төрлө санкция ысулдары ҡуллана һәм Рәсәй менән хеҙмәттәшлек итеүҙән баш тарта икән, ни өсөн беҙгә лә уларҙың алымдары менән яуап бирмәҫкә? Беҙ бер ҡасан да бахыр дәүләт булмаҡ һәм үҙебеҙҙән көлөргә, мыҫҡыл итергә юл ҡуймаһыҡ, сит-яттарҙың көс ярҙамында беҙҙе бөгөргә тырышыуына бирешмәнек. Бөгөнгө көндә лә Рәсәйҙе төрлө яҡлап быуырға теләп, бер-бер артлы санкция ҡулланыуҙарын, агрессив мәғлүмәти кампания алып барыуҙарын һуҙһеҙ генә "йотоп" ебәреү беҫәбеҙҙә төшөрәсәк. Шуға күрә уларҙың ҡайһы бер тауарҙарына эмбарго һалыу һәм экспорттарын сикләү ваҡытлы һәм кәрәкле эш, тип һанайым. Ә Рәсәй ҡануниәтен, уның ҡарарҙарын урап үтергә, һанға һуҡмаҫҡа теләгән тәьмин итеүселәрҙе финанс йәһәттән ҡаты язаға тарттырыу бик тә урынлы. Күпкә өлгәшер өсөн әҙҙән баш тартырға ла мөмкин, тигән аҡыллы фекер иҫкә төшә. Әлеге ваҡытта ниндәйҙер тауарҙан, уны юҡ итеү ысулы менән булһа ла, баш тартһаҡ, киләсәктә был аҙым, беренсенән, халыҡтың һаулығын һаҡлап ҡалырға, икенсенән, урындағы етештереүселәрҙе әүҙемләштерергә ярҙам итәсәк. Нисек кенә булмаһын, "Нимә эшләнһә лә, барыһы ла - яҡшыға" икәнлеген онотмайыҡ.

***Наил МЫРҘАҒӘЛИН, иҡтисадсы:*** Рәсәй территорияһына законһыҙ индерелгән аҙыҡ-түлектең, көнкүреш химияһының юҡ ителергә тейешлеге төрлө фекерҙәр тыуҙыра. Халыҡ өсөн бының һыңғай яғы нимәлә һәм кире яғы бармы тигән һорау ҙа мейене сукей. Минеңсә, был хәлдән сығыуҙың оптималь юлы юҡ. Ниндәй ҡарарға килгәндә лә уны яҡлаусылар менән бер рәттән, кире ҡағыусылар ҙа бихисап буласаҡ.

Рәсәйгә ауыл хужалығы тауарҙарын һәм көнкүреш химияһын индереүҙе йәки уларҙы бөтөнләй юҡ итеүҙе ҡулланғанда, беҙ урындағы тауар етештереүселәргә үҫеү мөмкинлеге бирәсәкбеҙ. Ләкин барыһы ла ябай ғына түгел. Импорт тауарҙарҙан бөтөнләй баш тартыу һәм үҙебеҙҙекенә генә күсеү өсөн тулы циклдағы етештереү комплекстарын күпләп төҙөү мөһим. Унда сеймал сығанаҡтан көрәкле тауар килеп сыҡҡансы эшкәртеү мөмкинлеге булырға тейеш. Шуға күрә, әлеге аҙыҡ-түлек эмбаргоһы ошондай эшмәкәрлек алып барыусы эре ауыл хужалығы компанияларына йәшел ут яндырҙы. Ләкин илдә ваҡ етештереүселәр ҙә бар икәнен онотоға ярамай. Улар әлеге хәлдән әллә ни файҙа күрә алмай, сөнки үҫтергән йәшелсә-емештәрен аҡсаға әйләндереү юлдары бик самалы. Улар эре компанияларҙы үтеп, ҙур магазиндарға килеп инә алмай, тауарын күмәртәләп тапшырыу урынына урамда, баҙарҙа тороп бөртөкләп һатыу итергә мәжбүр. Шуға күрә, әлеге ҡарарҙың урындағы етештереүселәргә үҫеү мөмкинлеге биреүенә тиклем оло эштәр атҡараһы бар. Һәм тыйылған аҙыҡ-түлекте юҡ итеү - ошо йүнәлештә алып барылған эшмәкәрлектең береһелер, тип уйлайым.

Беҙҙә импорт проценты ғәйәт ҙур. Ҡайһы бер эксперттар уның күләмен, ил буйынса 35-40 процент, ә Мәскәү һәм Санкт-Петербургта - 80-90 процент, тип билдәләй. Был һандар Рәсәйҙең импорт тауарҙарҙан бойондороҡло булыуы тураһында һөйләй. Ә шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең тәбиғи потенциалы 700 миллиондан ашыу кешене туйҙырырлыҡ мөмкинлеккә эйә. Ләкин оҙаҡ йылдар илдә урындағы етештереүҙе үҫтереүгә ҡарағанда, импорт тауарҙарҙы һатып алыуҙы күпкә ocho̧ҙораҡҡа төшөрөүсе шарттар булдырылды. Бөгөн килеп ошоноң эҙемтәләре менән осрашабыҙ. Аҙыҡ-түлектең, көнкүреш химияһының юҡ ителеүе был тауарҙарҙың дефицит булыуына килтермәһен, тип кенә теләргә ҡала, сөнки был хаҡтарҙың ныҡ күтәрелеүенә булышлыҡ итәсәк.

**Наҙгөл САФУАНОВА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡазанда XXII Татарстан нефть һәм газ химияһы форумын асыуҙа ҡатнашты. Был форум Рәсәй нефть һәм газ химияһы тармағының мөһим сараларының береһе булып тора. Форумдың эшлекле сараларында донъяның 22 иленән килгән меңдән ашыу делегат, Рәсәйҙең 185 предприятиеһы ҡатнаша. Улар араһында "Транснефть", "Татнефть", "ТАИФ", Henkel (Германия), Xandon Petroleum Technology (Ҡытай) кеүек компаниялар һәм башҡалар бар.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов менән Татарстан Президенты вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рөстәм Миңлеханов "Казан йәрминкәһе" күргәҙмәләр үҙәгендә экспозицияларҙы ҡараны. Шуларҙың береһендә газ-мотор яғыулығы менән эшләүсе автомобилдәр ҡуйылғайны. Рөстәм Хәмитов менән Рөстәм Миңлеханов тәҡдим ителгән өлгөләрҙе юғары баһаланы һәм газ-мотор яғыулығы менән эшләгән автомобилдәрҙе шәхси, шулай уҡ эш маҡсатында уңышлы файҙаланыу мөмкинлеген билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Һөт иле" V Бөтә Рәсәй фестивалендә булды. Быйыл сара Салауат Юлаев майҙанында ойошторолдо. 2011 йылдан Өфөлә уҙғарыла башлаған был фестиваль Бөтә Рәсәй һөт һәм һөт аҙыҡтарын ҡулланыуҙы дәртләндереү сиктәрендә үткәрелә. Сарала һөт эшкәртеү менән шөғөлләнгән 26 ойошма һәм өс фермер хужалығы ҡатнашты.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә төбәктең социаль-иҡтисади үҫешенең мөһим аспекттарына арналған кәңәшмә булды. Уны Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич һәм республика Башлығы Рөстәм Хәмитов үткәрҙе. Быйыл Башҡортостанда төп социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса ыңғай динамика күҙәтелә. Тәүге ярты йыллыҡта сәнәғәт етештереү индексы 100,3 процент тәшкил иткән, төп капиталға инвестициялар күләме 114,9 миллиард һумға еткән (үҫеш 17,4 процент).

✓Республикала күп балалы әсәләргә 118-се тапҡыр "Әсәлек даны" миҙалы тапшырылды. Ун ете йыл эсендә республика наградаһына ете меңдән ашыу күп балалы ҡатын лайыҡ булған. Был юлы бүләкте Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Салауат Сәғитов ҡулынан 60-тан ашыу ҡатын-ҡыҙ алды.

*✓ Ауылдарҙа эш юҡлығы, аҡсаһыҙлыҡ халыҡты бар көсөн мал-тыуарға йүнәлтергә мәжбүр итә. Шуға күрә Хөкүмәттең барыһын да ҡәнәғәтләндерерлек ҡарар ҡабул итеүен көтөргә генә ҡала.*

КӨНАУАЗ

**Ауылдың йәме лә, ҡото ла мал-тыуарҙа, ҡош-ҡортта. Шуға күрә Ставрополь крайы губернаторы Владимир Владимировтың шәхси хужалыҡтарҙағы эре һәм ваҡ малдың, шулай уҡ ҡош-ҡорттоң һанын сикләү тураһындағы һорауҙы күтәреүе күптәр өсөн көтөлмәгәнлек булды. Хужалыҡтарында күпләп мал аҫраусылар был тәкдимде ҡаты тәнҡит утына тотто. Шул уҡ ваҡытта уны яҡлаусылар ҙа юҡ түгел.**

# МАЛЫҢ БИК КҮПМЕ?

## Сикләргә тура килер!



Губернатор үҙенең әлеге теманы күтәреүен һәм ошо юҫыҡтағы ҡануниәтте төплө тикшереп, тейешле үҙгәреш-тәр индерергә кәрәклеген түбәндәгесә нигеҙләй. "Беҙҙең илдә бөгөнгө көндә шәх-си хужалыҡтың аныҡ ҡына критерийы юҡ. Мәҫәлән, ҡайһы бер төбәктәрҙә шәхси хужалыҡ артына "йәшеренеп", 14000 баш һарыҡ, 1500 баш эре мал, 2000 меңләп ҡош-ҡорт тотоусылар бар. Улар шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлмәгән, дәүләт ҡаҙнаһына һалым түләмәй", - тине ул Сочила үткән кәңәшмәләге сығышында. Ул федераль кимәлдә шәхси хужалыҡтар өсөн сикләүҙәр булдырыу йәки төбәктәргә бындай сикләүҙәрҙе үҙаллы билдәләү мөмкинлеге биреүҙе һораны һәм миҫал өсөн Ставрополь крайын килтерҙе. Унда 5-тән артыҡ һыйыр һәм 20-нән күберәк һарыҡ көткән кешеләр шәхси хужалыҡ булыуҙан туктап, шәхси эшҡыуарҙар рәтен тултыра икән. Хөкүмәт башлығы Ауыл хужалығы министрлығына Иҡтисадты үҫтереү, Финанс министрлыҡтары менән берлектә һәм Рәсәй төбәктәре ҡатнашлығында "ҡануниәттең шәхси хужалыҡ алып барыуға ҡағылышлы өлөшөнә үҙгәрештәр индереү, шул иҫәптән бындай хужалыҡтағы ауыл хужалығы малын һәм ҡош-ҡортто сикләү тураһындағы һорауҙы өйрәнергә һәм хәл итергә" ҡушты. Тәҡдимдәр ағымдағы йылдың 23 сентябренә тиклем Хөкүмәткә тапшырылырға тейеш, тип билдәләнә документта. Әйткәндәй, шәхси хужалыҡта мал һанын сикләргә тырышыуҙар 2009 йылда ла әлеге лә баяғы Ставрополь крайы депутаттары тарафынан күтәрелеп сыҡҡайны, ләкин ул ваҡытта инициатива яҡлау тапманы. Әлеге тәҡдим 112-се һанлы "Шәхси хужалыҡ тураһында"ғы федераль законға үҙгәртеүҙәр индереме-юҡмы икәнлеген ваҡыт күрһәтер.

Ҡайһы бер төбәктәрҙәге кеүек, ихатаһында меңәрләп мал аҫраусы шәхси хужалыҡтар беҙҙең республикала юҡ икәнлеге көн кеүек асыҡ. Ул тиклем һандағы мал-тыуарҙы 12-18 сутыйлыҡ биләмәлә урынлашҡан ауыл өйө ихатаһында тотоуҙы күҙ алдына килтереп тә булмай. Хәҙерге ваҡытта 4-5 һыйыр көтөүсе ауыл ғаиләһен тапһаң да бик мәслихәт әле. Ә ҡош-ҡортто меңәрләп түгел, бер-нисә тиҫтә алған кеше лә бөгөнгө көндә ауылдаштары араһында аптырау тыуҙыра, сөнки ул тиклем ҡош-ҡортто үлән менән генә үҫтереп булмай, ә емдең хаҡы "тешләшә". Уларҙы ашатыуға киткән бойҙай хаҡына ҡышҡылыҡҡа етерлек ҡаҙ йәки өйрәк ите һатып алырға мөмкин, ә бәпкә көтөп ыҙалайһы түгел.

Губернаторҙың һалымдар тураһында һүҙ ҡуҙғатыуы буштан юҡҡа түгел, әлбиттә. Ошондай эшмәкәрлек менән булған берәү һалымдарҙы түләп, ә икенсе берәү түләмәй генә малсылыҡ менән шөғөлләнә икән, кемеһе яйлыраҡ позицияла икәнлеге аңлашылып тора. Шулай уҡ дәүләт ҡаҙнаһы ла әлләй күпме килем юғалта. Тимәк, меңәрләп мал тоторға теләүселәр булһа, улар, ысынлап та, тейешле процедураларҙы үтеп, шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлергә бурыслылыр, моғайын.

Бындай һорауҙы күтәреүгә халыҡтың сәләмәтлеге тураһындағы борсолоуҙар ҙа этәрҙе, ти әлеге инициатива менән сығыусы. Шәхси хужалыҡтарҙа санитар нормаларҙың һаҡланыу-һаҡланмауын тикшереп йөрөүселәрҙе кем күргәне бар? Һәр кем хәленән, мөмкинлегенән һәм егәрлегенән килгәнсә ихатаһын тәртиптә тоторға тырыша, ләкин мал тиҙәгенә, ҡош-ҡорт йөнөнә батып ятҡан ихаталарҙы ла осратырға була. Нәҡ шундай хужалыҡтарҙа малдар төрлө сирҙәргә дусар булып, тирә-яҡтағыларға ҡамасау һәм борсолоу тыуҙыра ла инде. Улар янында йәшәүсе күршеләргә, ысынлап та, түҙемлектәрен йоҙроҡҡа төйнәп көн итергә генә ҡала. Ә шул уҡ ваҡытта ауыл хужалығы ойошмаларында таҙалыҡ, сифат һәм эшселәрҙең хәүефһеҙлеге яғынан контроль көслө.

Рәсәйҙә төрлө яклап "быуған" санкциялар ил етәкселеген ауыр хәлгә ҡуя. Сәйәсәт сәйәсәт менән, ә ашарға көн дә кәрәк. Тимәк, ил Хөкүмәте тиҙ арала һөҙөмтәле саралар уйларға һәм уларҙы ғәмәлгә ашырырға бурыслы. Белгестәр фекеренсә, ошо рәүешле Хөкүмәт үҙенең тыным-тырағай ваҡ етештереүселәр түгел, ә эре ауыл хужалығы предприятие һәм ойошмалары, фермер хужалыҡтары яҡлы икәнлегенә ишаралай, илдәге иҡтисади көсөргәнешлекте ошо рәүешле генә үтергә мөмкин булыуына ымлай. Шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлгән һәм бар эшмәкәрлеге күҙ алдында булған ҙур хужалыҡты контролдә тотоуы ла, улар етештергән продукцияның күләмен һәм сифатын тикшереп тороу ҙа бермә-бер еңел. Ләкин был ниәт халыҡты ҡарап ҡына торған мал-тыуарынан яҙҙырырға тейеш түгел. Һәр ғаиләнең мал-тыуарға булған ихтыяжы төрлөсә - кемгәлер бер һыйыр ҙа етә, ә икенселәр өсөн 5 баш мал да аҙ. Шуға күрә, ҡарар тотош ил өсөн уртаҡ түгел, ә һәр төбәктең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып ҡабул ителер, тигән ышаныс ҡына ниндәйҙер өмөт уята. Шуныһы көн кеүек асыҡ - ил етәкселегенең шәхси хужалыҡтарҙағы мал-тыуар һанының күпме булырға тейешлеген билдәләүсе ҡарарҙы хуплаусылар ҙа, уның менән ҡырҡа килешмәүселәр ҙә буласаҡ.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Айнур ҒӘБИТОВ, Баймаҡ районы:** Был, минеңсә, ауыл кешеһенең күҙ терәп торған малынан, ҡош-ҡортонан яҙҙырырға итеү. Әгәр ҙә һәр ғаиләгә, ундағы кеше һанын иҫәпкә алмайынса, берәр баш һыйыр, ике һарыҡ һәм ун тауыҡ ҡына көтөргә рөхсәт итһәләр? Ауылдарҙа эш юҡлығы, аҡсаһыҙлыҡ халыҡты бар көсөн мал-тыуарға йүнәлтергә мәжбүр итә: беҙҙә ашатыусы ла, кейендереүсе лә мал. Шуға күрә Хөкүмәттең барыһын да ҡәнәғәтләндерерлек ҡарар ҡабул итеүен көтөргә генә ҡала. Тормошта былай ҙа мәғәнәһеҙлек аҙым һайын, инде үҙ ихатаңда шуның менән осрашырға яҙмаһын.

**Сәлим ҒАРИПОВ, Ҡырмыҫҡалы районы:** Агросәнәғәт комплексында тәртип булдырыу күптән кәрәк ине. Ләкин ауыл хужалығындағы контролде йәйләргә тырышыу шәхси хужалыҡтарҙы аграр өлкәнән бер-нисә эре компанияның ҡыҫырыҡлап сығарылыуына килтермәҫмә тейеш. Шәхси хужалыҡ менән ҙур ауыл хужалығы ойошмаһын сағыштырыу һәм уларҙың эшмәкәрлеген бер нисбәттән сығып ҡарау урынһыҙ, сөнки беренселәренең етештергән тауары, икенселәр менән сағыштырғанда, диңгеҙгә тамған тамсы кеүек кенә. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан уларҙың да йәшәүгә, үҙ тауарын һатырға һәм килем алырға хоҡуҡтары бар. Шуға күрә Хөкүмәт шәхси хужалыҡтарҙың тынын быумаҫлыҡ, ауыл кешеләрен әсендермәслек ҡарар ҡабул итергә тейештер, тип уйлайым. Халыҡты асыуландырмау хәйерле.

**Эльвира МӨХӘМӘҘИЕВА, Иглин районы:** Һүҙ, ҡайһы берәүҙәр аңлағанса, мал-тыуарҙы кәметеү тураһында түгел, ә уларҙың һанын сикләү хаҡында бара. Мин, мәҫәлән, өйөм алдын күршемдең 7 һыйырынан, 20-ләп һарығынан, 30-лап ҡаҙынан ҡалған ҡалдыҡтарынан таҙартып арыным. Уның менән иплап тә һөйләшеп ҡараным, әрләшергә лә тура килде, хатта ауыл Советына сағыртып та малдарын төнгөләккә урамда ҡалдырмауын талап иттем - һөҙөмтәһе булманы. Ауыл Советы рәйесе белдереүенсә, һәр кем күпме теләй, шул тиклем мал тоторға хоҡуҡлы, тимәк, күршем артабан да малдарының һанын арттырырға мөмкин. Шуға күрә шәхси хужалыҡтарҙағы малдар һанын сикләү тураһындағы ҡарарҙы түҙемһеҙләнеп көтәм, сөнки күршемә закон нигеҙендә үҙ талаптарымды ҡуя аласаҡмын.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 сентябрҙә Өфөлә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Салауат Юлаев майҙанында ойошторолған "Башҡортостан студенттары параде - 2015" байрамында ҡатнашты. Республика етәксеһе беренсе курс студенттарын уҡыу йылының башланыуы менән ҡотланы һәм уларға символик студент билетын тапшырҙы. Студенттар, үҙ сиратында, Рөстәм Хәмитовҡа юғары уҡыу йорттарының лозунгыһы яҙылған гитара бүләк итте.

✓Ишембайҙа Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич һәм Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Геройы А. В. Доставалов исемендәге Башҡорт кадет корпусын ҡараны. Улар тәрбиәләнеүселәрҙе Белем көнө менән ҡотланы. Байрам сиктәрендә яңы йоҡо корпусын, күп функциялы физкультура-һауыҡтырыу комплексын һәм һауа десанты ҡаласығын асыу булды.

✓13 сентябрҙә Башҡортостандың 53 районында ауыл биләмәһе Советтарына депутаттар һайлау үткәрелә. Ике ҡала биләмәһе Советтарына - Шишмәлә һәм Приютта һайлау уҙғарыла. Өҫтәмә һайлауҙар ҙа ойоштороласаҡ: Күмертауҙа һәм Туймазыла Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға ике депутат, Өфө ҡала Советына бер депутат, шулай уҡ Әбйәлил, Мишкә, Стәрлетамаҡ район Советтарына һәм Учалы ҡалаһы ҡала биләмәһенә өҫтәмә һайлауҙар була. Бөтәһе 784 һайлау кампанияһы үтәсәк.

✓2 сентябрҙән Башҡортостанда урындағы үҙидаралыҡ депутаттарын һайлауҙа ваҡытынан алда тауыш биреү башланды. Ул 12 сентябргә тиклем дауам итә.Төбәктә һайлауҙың рәсми датаһына тиклем тауыш биреү урындағы үҙидаралыҡ органдарына һайлауҙар үткәргәндә генә ҡулланыла. Республика кимәлендәге һайлауҙарҙа тауыш биргәндә һайлаусы теркәүҙән төшөү таныҡлығы менән файҙалана ала. Ваҡытынан алда тауыш биреү өсөн етди сәбәп кәрәк. Ваҡытынан алда тауыш биреүсе һайлау комиссияһына сәбәбен күрһәтеп ғариза бирә.

✓Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы 2016 йылға театр коллективтарының ижади проекттарын яҡлау маҡсатында республика Башлығы гранттарына дәғүә итеүгә конкурс иғлан итте. Конкурс нигеҙендә һайлап алынған театрҙарға ижади проекттарын ғәмәлгә ашырыу өсөн 900 мең күләмендәге ике грант биреләсәк. Бәйгелә республикалағы дәүләт, шулай уҡ шәхси театрҙар ҡатнаша ала. Ғаризаларҙы 1 октябргә тиклем Мәҙәниәт министрлығының һөнәри сәнғәт, мәғариф һәм ижади проекттар бүлегенә ебәрергә кәрәк.

## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы.** Енәйәтселекте һәм хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеүҙең өҫтөнлөклө йүнәлешһтәренең береһе - йәйге каникулдар ваҡытында балиғ булмағандарҙы хеҙмәткә йәлеп итеү. Быйыл районда 708 бала ваҡытлыса эшкә урынлаштырылған, шуларҙың 46-һы полицияла һәм Балиғ булмағандар эштәре һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау комиссияһында иҫәптә тора. 11 ҡыҙ Благовар районындағы - "Юлдаш", 10 малай Илештәге "Таң" лагерында ял иткән.

**Совет районы.** Октябрҙең 50 йыллығы урамында Башҡорт дәүләт аграр университетының яңы йөҙөү комплексы асылды. Оҙонлоғо - 25, киңлеге 22,5 метр булған бассейнда алты метр тәрәнлектәге 8 юл бар. Был - ҡала үҙәгендә заман талаптарына яуап биргән беренсе ҙур бассейн. Бынан тыш, унда тренажер залы, сауна, душ кабиналары бар. Комплекс базаһында дайвинг үҙәге асыу ҙа планлаштырыла. Машина ҡуйыу өсөн 100 урынлыҡ ер аҫты паркингы эшләй.

**Дим районы.** 26 августа ата-әсәләр өсөн "Балаларыбыҙҙың мәктәптәге иртәгәһе" тип аталған район конференцияны үтте. Өсөнсө йыл рәттән уҙғарылған сара бигерәк тә балаларын беренсе синыфҡа алып килеүселәр өсөн файҙалы. Сөнки баланың яңы шарттарға өйрәнеүе бала өсөн генә түгел, ата-әсәләр өсөн дә стресс. Ә ин мөһиме - бөгөнгө беренсе синыф уҡыусылары - 2026 йылғы сығарылыш синыфы һәм ошо арауыҡта улар заманса, бик тиҙ үҫешеүсе йәшәйешебеҙ талаптарына яуап бирерлек булып тормош юлына баҫырға тейеш. Бигерәк тә ата-әсәләрҙе биш йылдан һуң ниндәй һөнәрҙәр талап ителәсәге ҡыҙыҡһындырҙы.

**Киров районы.** Беренсе тапҡыр Башҡортостан студенттары парады уҙҙы. Ул Совет майҙаны - Зәки Вәлиди урамы - Салауат Юлаев исемендәге майҙан маршруты буйынса үтте. Байрамда баш ҡаланың 11 вузынан ете мендән ашыу беренсе курс студенты ҡатнашты. Салауат Юлаев майҙанында улар өсөн "Сәләм, студент!" тип аталған концерт ойошторолдо. Студенттарҙы һәм педагогтарҙы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡотланы.

**Ленин районы.** Белем көнөндә районды 250 йәш спортсыһы тантаналы линейканан һуң "Тулҡын" паркында Мәктәп велопарадына йыйылды. Велосипедсылар парады үҙәк урам аша "Водник" стадионына килеп, унда тиҙлеккә һәм ауырлыҡҡа көс һынашты, профессионалдар сығышын ҡараны. Сара һуңында төрлө спорт сараларында еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр һәм призлар тапшырылды.

**Орджоникидзе районы.** "Дауаханаларға - китап!" социаль проекты сиктәрендә 10-сы ҡала клиник дауаханаһы ихатаһында китаптар ҡуйылған стеллаж урынлаштырылды. Был башланғыстың инициаторҙары булып 31-се, 41-се, 29-сы модель китапханалары сығыш яһай. Был - быйыл йәйгеһен районда асылған өсөнсө "Ирекле китапхана".

**Октябрь районы.** 6 сентябрҙә сәғәт 12-лә "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында мәктәпкә, мәғарифҡа һәм мәҙәниәткә арналған "Балалар - беҙҙең киләсәк" тип аталған киң күләмле байрам үтә. Сарала "Беренсе кластар аллеяһы-2015" асыласаҡ. Унда балаларҙың фотолары, исемдәре, ҡултамғалары, хыялдары урын аласаҡ. Шулай уҡ беренсе синыф уҡыусылары тематик майҙансыҡтарҙа үҙҙәрен төрлө профессияла һынап ҡарай аласаҡ.

## ҠАЛА СОВЕТЫНДА

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында депутаттар Өфө бюджетының килем өлөшөн 22,132 миллиард һумғаса арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Был мөмкинлек республика бюджетынан өҫтәмә рәүештә 700 миллион һумдан ашыуыраҡ сумма бүленеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде.**



# МУЗЫКА МӘКТӘБЕ, КҮПЕР...

Аҡсалар нигеҙҙә Ағиҙел аша яңы күпер төҙөлөшө документтарын әҙерләүгә, Ағиҙел ярын нығытыу ҡоролмалары төҙөүгә, мәктәптәрҙең һәм балалар баҡсаларының матди базаһын нығытыуға йүнәлтеләсәк. Былтыр ҡабул ителгән бюджетта килем өлөшө - 16, сығымдар - 16,8 миллиард һум, дефицит 800 миллион һум тип планлаштырылғайны. Һуңғы үҙгәрештәрҙән һуң килем өлөшө - 22,132, сығымдар - 23,752 миллиард һум, дефицит 1,62 миллиард һум тәшкил итә.

Яңы күпер баш ҡаланың көньяҡ өлөшөндә, әле булған ике күпер йәнәшәһендә төҙөләсәк. Уның оҙонлоғо 670 метрға етәсәк. 1956 йылда төҙөлгән күперҙең оҙонлоғо 653 метр булһа, икенсеһенеке - 662 метр. Яңы күперҙең дөйөм майҙаны 1,3 гектар тип күҙаллана. Уның киңлегенә өс автотранспорт һыҙаты һыясаҡ. Төҙөлөп бөткәндән һуң был күпер, 1956 йылда төҙөлгәне кеүек үк, бары тик машиналарҙың сығыуы өсөн, ә ҡалаға инеү өсөн икенсе, биш һыҙатлы күпер файҙаланыласаҡ. Төҙөлөш яҡынса 6 миллиард һумға барып баҫасаҡ. Уны дүрт йылда төҙөү планлаштырыла.

Шулай уҡ депутаттар ултырышта баш ҡаланың Совет районында бер үк ваҡытта 46 бала шөғөлләнеү мөмкинлеге булған яңы музыка мәктәбе төҙөү мәсьәләһен дә ҡараны. Красноводская, Обь, Менделеев, Аҡназаров урамдары киҫелешендәге кварталда музыка мәктәбе менән бер рәттән дөйөм майҙаны 12 мең квадрат метр булған йорт һәм 372 автомобилгә парковка, спорт майҙансығы төҙөү ҙә планлаштырыла.

Баш ҡаланың Максимовка биҫтәһендәге Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (ТОС) - баш ҡалалағы беренсе шундай ойошма булыр, моғайын. Был биҫтәнең инициатив төркөмө алдағы йылдарҙа ла шундай идея менән сығып ҡарағайны. Әммә улар башланған эште ахырынаса алып барып еткермәйенсә, ярты юлда туктап ҡала һәм үҙидаралыҡҡа бирелгән территория тураһындағы ҡарар көсөн юғалта. Әле лә улар ҡабаттан шул идеяны күтәреп сыҡҡан. Һәм депутаттар Максимовкалағы үҙидаралыҡтың яңы сиктәрен билдәләп, уға Калинин районына ҡараған 39 урам, 6 тыҡырығын индерҙе.

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҺӨНӘРЛЕЛӘР ЯРЫШЫ



**Республикала һәр төрлө һөнәр эйәләренең иң-индәрен көс һынаштырыу йолаһы бар. Ҡайһылары ғәҙәттәге һай программалы концертты хәтерләтә ул хәтерләтеүгә, әммә бөгөн һүҙебеҙ ундай конкурстар тураһында түгел. Бөгөн һүҙебеҙ - умартасылар араһында үткәрелгән республика конкурсы тураһында.**

Былтыр Красноусолда уҙған ошо конкурста Ауырғазы районы Бишҡайын ауылы умартасыһы С. Иванов беренсе урын яулағас, кҿсмә кубок - уға, ә киләһе ярышты уҙғарыу хоҡуғы районға бирелгәйне. Быйылғы 15-се республика умартасылары конкурсы менән 9-сы Йәш умартасылар конкурстары тап ошо районда уҙҙы. Унда Франциянан килгән Халыҡ-ара умартасылар федерацияһы президенты Ж. Ратиа, БР ауыл хаужалығы министрлығын беренсе урынбаҫары А. Йыһаншин, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Ә. Ишемғолов һәм башҡа ғалимдар ҡатнашты. Әйткәндәй, конкурсҡа республиканың 38 районынан 122 умартасы, шулай уҡ 29 районадан 42 йәш умартасы килгәйне. Умартасыларҙы ғалимдар менән бер рәткә ҡуйыуыбыҙ юҡҡа түгел. Ни өсөн тигәндә, уларҙың йәйен-ҡышын бал ҡорттарын тәрбиәләп, төрлө тәжрибәләр ҡулланып, оҫтарып бөткән бик һәйбәт тикшеренеүселәргә әүерелеүе бер кемгә лә сер түгел. Умартасылыҡ эшендә ата-бабаларҙан ҡалған ысулдарҙан тыш, яңы ысулдар ҡулланыу ҙа конкурстың баһалама комиссияһы тарафынан иҫәпкә алынды. Бөгөнгө ярышта ҡатнашыусылар үҙҙәренең практик оҫталығын да, теоретик белемен дә күрһәтте. Уҙған йылдарҙа беренселекте яулаусы 14 оҫта араһында параллель зачет үткәрелде, абсолют чемпион исеме Ишембай районынан Илгиз Шәнгәрәйевкә бирелде. Умартасыларҙың ҡыҙыу ярышы һуңынан еңеүселәр ҙә билдәләнде. Беренсе урынды һәм киләһе ярышты үҙҙәрендә уҙғарыу хоҡуғын Миәкәнән Миңлебай Әһлиуллин яуланы, икенсене - Дүртөйлө районынан Тимур Фәхрәзов ҡулдан ысҡындырманы, өсөнсө баҫҡысты Ҡыйғы районынан Марат Йосопов биләне.

Балалар араһындағы ярыш һөҙөмтәләре түбәндәгесә булды: Ауырғазы районынан Эльвина Нәҙершина - беренсе урын, Нуриман ҡыҙы Рания Янова - икенсе, Баҡалы егете Айнур Әхмәтвәлиев - өсөнсө урын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ҡортсоноң әйткәне хәтергә төштө: "Йәш сағымда бал ҡорто үрсетергә булып киттем. Бер умартасы танышымдан күс һатып алдым, балта оҫтаһынан дадан эшләттем. Теге күсемде алып, яп-яңы умартаға ҡойоуым булды, күсем ояны үҙ итмәй, осто ла китте. Баҡһаң, умарта булыу ғына аҙ икән - эсендә рамдар, ҡыйыҡ менән рам араһына яҫтыҡтар кәрәккән икән. Мин ни, белмәгәс..." - тигәйне ағай. Ошондай хәлгә ҡалған йәш умартасылар бармы икән хәҙер? Барҙыр, әммә аҙҙар. Ни өсөн тигәндә, хәҙер был боронғо умартасылыҡ һөнәре халҡыбыҙға яңынан ҡайта, ауылдарҙа уны онотмағандар, бар нескәлектәрено тиклем хәтерендә һаҡлағандар ҙа бихисап әле. Умартасылыҡҡа махсус уҡыу йорттарында, Бөрйән һәм башҡа райондарҙа һәр мәктәптә уҡытылар ҙа. Йәгни йәштәребеҙ өсөн ата-бабалар һөнәрено өйрәнер тәжрибә мәктәбе бар. Уларҙы сәмләндерер әлеге ләй ярыштар ҙа уҙғарылып тора. Һөнәрмәндәр ярышы барыбер ҙә күркәм күренеш инде ул.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ял көндәрендә, 5 һәм 6 сентябрҙә, Өфөнөң алты районында йәшелсә-емеш йәрминкәләре ойошторолa. Дим районында - Хәҡиҡәт урамы буйлап М. Йәлил урамына тиклем автомобиль юлы эргәһендә, Калинин районында -"Юлдаш" сауҙа-йәрминкә комплексында, Киров районында - Эшсе хәбәрселәр урамындағы майҙанда, Октябрь районында - "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янында, Орджоникидзе районында - С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда, Совет районында Комсомол урамындағы 18-се йорт янындағы майҙанда була. Сауҙа өсөн урындар ауыл халҡына бушлай бирелә.

✓Ҡала хакимиәтенең физик культура һәм спорт комитеты иғлан иткән "Өфө - спорт баш ҡалаһы" фотокүргәҙмәһенә эштәр ҡабул итеү дауам итә. Спорт тематикаһына арналған биш фотоһүрәтте һайлап алып, 10 сентябргә тиклем pr-sport-com@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Иң яҡшы фотоһүрәттәрҙән экспозиция төҙөләсәк, уны Өфө хакимиәте фойеһында һәм ҡаланың башҡа майҙансыҡтарында урынлаштырыу планлаштырыла.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте продукцияһы Мәскәүҙең Халыҡ хужалығы ҡаҙанышҙары күргәҙмәһендә уҙғарылған 28-се Халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһендә ҡатнашты. Күргәҙмәгә килеүселәр өсөн нәшриәт Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған китаптар әҙерләне. Шулай уҡ әҙәбиәт һөйөүселәргә нәфис әҙәбиәт, сәнғәт, балалар өсөн, тыуған яҡты өйрәнеү буйынса китаптар тәҡдим ителде.

✓Рәсәй Хөкүмәте "Торлаҡ" федераль маҡсатлы программаһын 2020 йылға тиклем оҙайтты һәм уның яңы редакцияһын раҫланы. 2015-2020 йылдарҙа "Торлаҡ" программаһын финанслауҙың дөйөм күләме 691,82 миллиард һум тәшкил итәсәк, тип күҙаллана. Яҡынса мәглүмәттәр буйынса, ошо программаны ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә 230 мендән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртасаҡ.

✓Ҡытайҙың "Чжифан" компанияһы Башҡортостанда машиналар эшләү менән ҡыҙыҡһына. Был хаҡта республиканың Инвестиция йәлеп итеү агентлығында уҙған эшлекле осрашыуҙа ошонда вәкилдәре белдерҙе. Осрашыу "Волга-Янцзы" форматындағы Волга буйы федераль округы һәм Янцзы йылғаһының юғары, урта ағымы төбәктәре етәкселәренең тыңәрәк өҫтәл ултырышы йомғаҡтары буйынса үтте. Ҡытай яғынан "Чжифан" компанияһы етәксеһе Ван Лунь әфәнде сығыш яһаны.

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ҠАСАҠТАР АҒЫМЫ...

## Европаны баҫып алды



**Европаға төрлө илдәрҙән килеүсе ҡасаҡтарҙың күбәйеүе әлегәсә тарихта күҙәтелгәне юҡ ине. Frontex сик буйы агентлығы хәбәр итеүенсә, ағымдағы йылдың 7 айында ғына Евросоюз илдәренә 340 мең тирәһе ҡасаҡ килгән. Был уҙған йылдың ошо уҡ ваҡыты менән сағыштырғанда 3 тапҡырға күберәк. Ә уҙған йылда ҡасаҡтарҙың дөйөм һаны 123500 кешегә еткәйне.**

Һуңғы ике айҙа иң күп ҡасаҡтар ағымы Грецияға йүнәлә. Тик июлдә генә Грецияның Лесбос, Хиос, Самок һәм Кос утрауҙарына 50 меңдән ашыу ҡасаҡ яңы тормош эҙләп килгән. Икенсе Европа иле - Италия ла - һуңғы ваҡытта Төньяҡ Африка һәм Яҡын көнсығыш илдәренән килгән ҡасаҡтар тулҡынын ҡабул итә. Йылдың тәүге яртыһында Италияға килеп һыйыныусылар һаны 90 меңдән ашып киткән.

Быйыл Урта диңгеҙ аша Европаға барып етергә тырышыусы меңәрләгән легаль булмаған мигрант һәләк булған. Былтыр иһә ошо уҡ диңгеҙҙә 34 меңдән ашыу, ә 2013 йылда - 700 тирәһе мигрант батҡан. Был һандар тик диңгеҙҙә һәләк булған ҡасаҡтарҙы ғына үҙ эсенә ала, ә ҡоро ерҙән Европаға ынтылыусылар араһындағы ҡорбандар тураһында мәғлүмәт юҡ.

Яҡын Көнсығыш һәм Африка илдәренән ҡасып килеүселәр көрсөгө Евросоюз илдәре араһындағы мөнәсәбәттәрҙе етди һынылышҡа килтерҙе һәм союзды берләштереп торған ҡайһы бер төп ҡиммәттәрҙе һынау алдына ҡуйҙы. Июнь аҙағында Брюсселдә уҙған Европа илдәре башлыҡтарының осрашыуында Еврокомиссия тәҡдим иткән ҡасаҡтарҙы урынлаштырыу буйынса квота схемаһы тирәләй етди бәхәстәр ҡупты. Европа әлегә кешенең хоҡуҡтарын яҡлау һәм ғүмерҙәренә ҡурҡыныс янағандарҙы һыйындырыу кеүек төп идеологик ҡағиҙәләрҙән формаль рәүештә баш тарта алмай. Ләкин күпселек күҙәтеүселәр фекеренсә, бының өсөн бары тик ваҡыт ҡына кәрәк, юғиһә бөтә Европа ҡоролошона емерелеү янай. Хәлдәр артабан нисек ҡуйырыуын көтөргә генә ҡала, ә әлегә Еврокомиссия миграцион көрсөк мәсьәләһен хәл итеүҙә тулы һәләтһеҙлек күрһәтә.

Был шарттарҙа Европа илдәренең күбеһе үҙ сиктәрендә стеналар төҙөй башланы. Мәҫәлән, Африканан килеүсе ҡасаҡтар ағымын туҡтатырға тырышып, Испания ошондай эшкә тотондо. Шулай уҡ Венгрия, Бөйөк Британия, Төркиә һәм Франция ла "төҙөлөш" эштәрен башланы. Бер һүҙ менән әйткәндә, Берлин стенаһын "илдәр һәм төрлө мәҙәниәттәр араһында булырға тейеш түгел һыҙыҡты алып ташлау" тигән һүҙҙәр менән юҡ иткән көнбайыш сәйәсмәндәре бөгөнгө көндә бөтә донъянан ышыҡланыу өсөн яңы стена төҙөү мөһимлеге тураһында яр һала. Шулай уҡ Евросоюз вәкилдәре "Дублин конвенцияһы"н яңынан ҡарау тураһында ла тәҡдимдәр индерә, сөнки бөгөнгө көндә был конвенция эшләмәй, тигән фекерҙә улар. Европарламент ағзаһы Сесилия Викстрем был конвенцияға башҡа төрлө альтернатива эҙләү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алып: "Ҡасаҡтар килгән беренсе илдәр, күпселек осраҡта, уларҙы теркәмәй, бармаҡ эҙҙәрен алмай һәм бер ниндәй документһыҙ артабан китергә рөхсәт итә", - тип белдерә. Унын һүҙҙәрен Германия вәкилдәре ҡеүәтләй һәм Италия менән Грецияға ҡасаҡтарҙы ҡабул итеү, тейешле документтарҙы тултырыу һәм бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһен япһарырға тырыша.

Бөйөк Британияның Сит илдәр министры (МИД) Филип Хэммонд ҡасаҡтар менән мәсьәләне хәл итеүҙең юлын уларҙы илдән сығарып ебәреүҙә күрә. Бындай аҙым, унын белдереүенсә, Бөйөк Британияның милли хәүефһеҙлеген уйлап эшләнә. Лондон ҡасаҡтарҙан арыныу өсөн эшмәкәрлек башлаған да инде. Мәҫәлән, Бөйөк Британия хөкүмәте мигранттарҙы ҡурҡытыу маҡсатында Англияла уларҙы һәйбәт тормош көтмәйәсәген аңлатҡан мәғлүмәти кампания асып ебәргән. Власть вәкилдәре, ҡасаҡтар килә ҡалһа, уларға торлаҡ һәм медицина хеҙмәттәре сикләнгән рәүештә күрһәтеләсәген, эшкә урынлашыу мөмкинлеге булмаясағын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шулай уҡ яҡын арала ил парламенты Англияға легаль булмаған юл аша килеүсе ҡасаҡтарҙы ярты йылға тиклем төрмәгә ултыртыу тураһындағы законды ҡараясаҡ. Әгәр ҙә ул ҡабул ителһә, Бөйөк Британияға килергә баҙнат иткән ҡасаҡтарҙы төрмә көтәсәк.

Германияны ла ҡасаҡтар һанының күбәйеү мәсьәләһе ныҡ борсоуға һала. Ил етәкселеге фекеренсә, Евросоюз илдәре араһында сиктәрҙе бер ниндәй контролһеҙ үтеү мөмкинлеге биргән Шенген зонаһы башҡа "йәшәй" алмай. Немец сәйәсмәндәре баһаһына ярашлы, Германия ҡасаҡтарҙың төп баҫымына дусар булыусы ил. Миграция көрсөгөнөң үҫә барыу юлдарын туҡтатыу әмәлен ФРГ хөкүмәте сентябрь аҙағында үтәсәк кәңәшмәлә эҙләйәсәк. Шул уҡ ваҡытта ил халҡы, бигерәк тә Көнсығыш Германияла йәшәүселәр, ҡасаҡтарға ҡаршы дошманлыҡ күрһәтә, уларҙың йәшәгән урындарына һөжүм итә.

Кеше ғүмерҙәрен ҡыйыусы ошондай буталсыҡта кем ғәйепле һуң? Европалыларҙың күбеһе бөгөнгө көндә ҡасаҡтар менән барған хәл-ваҡиғаларҙа төп ғәйеп Яҡын Көнсығышта һәм Африкала маҡсатлы рәүештә ситуацияны ҡуйыртҡан Америкала, тип бара. Ә Австрия баҫмаһы Info-Direkt үҙенең ышаныслы сығанаҡтарына таянып, АҠШ-ты ҡасаҡтарҙы Европаға ташыусыларға түләүҙә ғәйепләй. Улар, тип яҙа баҫма, техник йәһәттән һәйбәт тәьмин ителгәндәр һәм Facebook, Twitter һәм Skype ярҙамы менән иркен ҡуллана.

Ҡасаҡтар менән осрашып, уларҙың ниндәй хәлдә көн итеүҙәрен, ҡайҙа юл тотоуҙарын, ниндәй хыялдар менән Европаға килеүҙәрен үҙҙәре күргән һәм ишеткән журналистарҙың фекерҙәрен дә тыңлап үтеү яҙыҡ булмаҫ. Улар әйтеүенсә, ҡасаҡтар үҙҙәрен сит илдә, кеше ерендә бик иркен тотоусы һәм үҙҙәренең ҡағиҙәләрен урынлаштырырға тырышыусы, күбеһе 20-30 йәшлек ир-егеттәрҙе тәшкил иткән төркөмдәр. Ҡасаҡтарҙан ыҙа сиккән ил халҡы улар йөҙөндә Европаның уларҙы бушлай ашатырға һәм кейендерергә, торлаҡ һәм эш бирергә, медицина хеҙмәте күрһәтергә бурыслы, тип һанаған аҡсалы, бай кешеләрҙе күрә. Ысынлап та, төрлө фотоһүрәттәрҙән күренеүенсә, ҡасаҡтар ҡулында ҡыйбатлы кеҫә телефондары, компьютер һәм планшеттар, улар бер ҙә һуғыштан арып-йонсоп ҡасҡандарҙы хәтерләтмәй. Уларҙың күбеһе, үҙҙәре барып урынлашҡас та, тыуған илдәрендә ҡалған ата-әсәһен һәм башҡа туғандарын мотлаҡ яндарына аласаҡтары тураһында бәйән итә. "Комсомольская правда" хәбәрсеһе Дарья Асламова әйтеүенсә, "мин Белградта күргән ҡасаҡтар Ливанда осрашҡан сириялыларға оҡшамаған. Ливияла бөтә нәмәләрен юғалтҡан һәм эҫе ҡояш аҫтында әкрен генә үлемгә дусар ителеүселәр менән Европаға килеп етеүселәрҙе сағыштырып булмай. Һуңғылары - аҡсалы һәм алдарына ғәйәт ҙур маҡсаттар ҡуйыусы элита".

Сербияның элекке Сит илдәр министры Живадин Йованович фекеренсә, әле килеп шартлаған миграция бомбаһының сәбәптәре беҙ уйлағандан күпкә ҡатмарлыраҡ. "Беҙгә йәш, аҡсалы, белемле ир-егеттәр килә. Уларға кемдеңдер финанс ярҙам күрһәтеүе көн кеүек асыҡ. Беҙҙең алда "йоҡлаусы террористар". Ваҡыты еткәс, уларҙы уятасаҡтар һәм Европаны террор ағымы баҫып аласаҡ", - тип хәүефен белдерә ул.

Күпселек ҡасаҡтар үҙҙәрен Сириянан тип күрһәтә. Ләкин "алдаҡ сириялылар" араһында Ираҡ, Афғанстан, Пакистан, Ливия һәм башҡа ил вәкилдәре бихисап. Уларҙың һәр береһенең Евросоюз илдәренә ҡарата асыуы, негатив ҡарашы көслө. Ливия гражданы әлеге ваҡытта Европа илдәренең береһендә һыйынырға тырышҡан табип ҡасаҡтар мәсьәләһенең көндән-көн ҡуйырыуына былай тип аңлатма бирә: "Минең әлегә сербтарға ҡарата ғына дәғүәм юҡ. Ә Греция, Венгрия, Словакия, Хорватия - НАТО ағзалары. Эйә, улар минең илемде бомба утына тотманы, ләкин НАТО бюджетын тулыландырыуҙа улар ҙа ҙур роль уйнай. Улар үҙҙәренең һалдаттарын Афғанстанға һәм Ираҡҡа ебәрә. Уларға яҙанан ҡотолоу юҡ. НАТО бөтә Яҡын Көнсығышты ҡанға ҡойондорҙо һәм хәҙер үҙе өҫтөнән власты Америка иблисенә биргән Европа юҡ ителәсәк. 5 йылдан Европаның йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрәсәк. Мин быға ҡыуанмайым. Мин бөйөк Европа мәҙәниәтен хөрмәт итәм һәм сиркәүҙәр урынында мәсет манаралары тороуын теләмәйем. Ләкин был нәҡ шулай буласаҡ. Был - ғәҙел яза". Унын һүҙҙәрен Венгрия парламенты ағзаһы Мартон Дьендьеши ла ҡеүәтләй: "Венгрия - Евросоюз һәм НАТО ағзаһы. Һәм был ойошма Сирия, Тунис, Ливия, Ираҡҡа ҡаршы агрессив сәйәсәт алып барғанда беҙҙең шымып ҡалыуыбыҙ - ҙур ғәйеп".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ике яҡ та - ҡасаҡтар ағымына ҡаршы торған илдәр ҙә, Европаға һәйбәт тормош артынан килеүсе мигранттар ҙа - килеп тыуған мәсьәләне үҙҙәренсә күрә һәм аңлай, уларҙың һәр береһенең үҙ дөрөҫлөгө һәм был көрсөктән сығыуҙың үҙ юлдары. Ләкин шуныһы факт - был тиҙ арала хәл итеүергә тейешле бөтә донъя масштабындағы ҙур проблема. Һәр ил айырым һәм үҙ мәнфәғәттәрен генә алға ҡуйып түгел, ә бергәләп дөйөм ниндәйҙер ҡарарға килгәндә генә унын осона сығырға мөмкиндер.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тын алыуы ауырлашһа...

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы лимон йәки алманы һүрән утта 10 минут бешереп, һутын һығып алырға, 2 ҡалаҡ глицерин ҡушырға, барлыҡҡа килгән шыйыҡлыҡ күләмендә бал ҡушырға. Көнөнә бер тапҡыр эсергә.

❖ Үҫемлек майы, камфара спиртын, 10 процентлы һеркәне бер күләмдә алып, йөн туҡыма аша компресс яһарға.

❖ 1 ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡарағат һәм ҡурай еләге ҡатнашмаһына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут термоста төнәтергә, ас ҡарынға көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Бауырға дауа

❖ 1:1 нисбәтендә тоҙло кәбеҫтә һыуы менән помидор һутын ҡушып эсергә.

❖ Бауыр ауыртҡан ваҡытта көнөнә 3 тапҡыр ҡуйы итеп гөлйемеш тамырын ҡайнатып яртышар йәки 1-әр стакан эсергә.

### Йәшелсә - ҙур дауа

❖ Һыҙлауыҡ, шешек сыҡҡанда, өшөгәндә, бешкәндә, сөйәлдәрҙе йомшартҡанда һуған ашарға, ауыртҡан ергә ябырға.

❖ Сәс ҡойолһа, ҡорсаңғы төшһә, һарымһаҡ аша, тәнеңде ышҡы.

❖ Йөрәхәт оҙаҡ йүнәлмәһә, селдерей япрағы, әстерхан сәтләүгеге, лимон, гөлйемеш, алоэ ярҙамға килер.

❖ Шешек һәм сиҡандарҙан помидор, аҡ сәскә (ромашка), ҡомалаҡ, юл япрағы, үгәй инә япрағы (мать-и-мачеха), муйыл ҡотҡара. Шуларҙы аша, тәнеңә яп.

❖ Ҡара торма (редька), кәбеҫтә, ҡабаҡ тәндәге тимерәүҙе дауалай, шулар менән тимерәүле урынды ышҡыйһың, ябаһың.

❖ Лимон, кишер, керән (хрен), ҡыяр, фасолде косметик маҡсатта йыш ҡулланалар. Битлек эшләгеҙ, һутын һөртөгөҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТОРНАҠАЙ
## балама тояҡ ҡалдыр!

**Изге ҡош булараҡ, торна киләсәкте юраусы булараҡ та, ырыуҙың ҡотон, кешенең сәләмәтлеген һаҡлаусы, матди байлыҡ, бәхет килтереүсе булараҡ сығыш яһай.**

"Санай батыр" әкиәтендә торна тылсымлы көскә эйә генә түгел, ғаиләләрҙе һәм әсәләрҙе яҡлаусы ла. Герой ҡыҙ ҡайын ботағына торна тырнағын бәйләп, яҙмышын юрай. "Әгәр ҙә, - ти ул - мин Ҡосон батырҙың ҡатыны булһам, уға ул бүләк итеп, Санай тип исем ҡушыр инем". Шул мәлдә торна тырнағынан бал аға башлай, йәғни, ҡыҙҙың үтенесе күктәге торнаға барып етә. Ҡосон батыр ҡыҙға өйләнә һәм уларҙың улы тыуа.

Торнаның ғаиләләрҙе, ғаилә ағзаларының үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәрен һаҡлаусы булыуы этнографик тикшеренеүҙәр мәлендә лә асыҡлана. Мәҫәлән, Һарытау өлкәһе башҡорттары араһында торна - яҙмыш хужаһы, тигән ышаныу йәшәй. Был хаҡта ырғыҙ-кәмәлек башҡорттарынан яҙып алынған хикәйәт һөйләй: "Торна - хужа ул. Ауылда бер ағаста торна йәшәгән. Әүлиә мулла бар ине. Ул: "Торнағыҙ китһә, өйөгөҙ яна", тине". Башҡорт теле нормалары буйынса, өй яныу тигән һүҙбәйләнеште "ғаиләнең тарҡалыуы" тип тә аңлап була. Ә "яныу" һүҙе "юҡҡа сығыу", "уңышһыҙлыҡҡа осрау" тигәнде лә белдерә. Был фекерҙе алдағы хикәйәт тә раҫлай: "Аны ҡыумайһың, торна үҙе белеп китә, ти. Шул торна китмәһен тип, тыныс йәшәргә тырыштыҡ".

Башҡорттарҙа тағы ла шундай ышаныу бар: торналар атламаған балаларға аяҡ алып килә, тиҙәр. Был тышау ҡырҡыу йолаһында һаҡланып ҡалған. Иң яҡын кешеләренең береһе баланың аяғын үрелгән бау менән бәйләй һәм: "Ҡаҙҙар ҡанат, торналар аяҡ бирһен!", тип, бауҙы ҡырҡҡан хәрәкәттәр яһай. Йәш әсәләрҙең осоп барған торналар тубына ҡарап теләгән теләгендә лә ошо уҡ маҡсат ята: "Торнаҡай, минең балама тояҡ ҡалдыр!". Бындай ышаныу Свердловск өлкәһе башҡорттарында ла бар: "Торналар йәш балаға аяҡ килтерә".

"Сыңрау торна" легендаһында (К. Дияров варианты) торналар ҡысҡырып дошман яуы тураһында хәбәр итә. Ҡарттарҙың кәңәше буйынса, башҡорттар яуға әҙерләнә башлай. Шул арҡала улар дошман яуын еңә.

Ғәйнә башҡорттары ышаныуҙары буйынса, ихатаға торна оя ҡорһа, был бәхет һәм бәрәкәткә. Торнаны үҫәргәндәр ҙә бәхет ҡошо итеп ҡабул иткән. Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Сурай ауылынан информатор М. Килдебаева был турала шулай тигәйне: "Хәҙер бит беҙгә торналар килмәй. Әгәр килһәләр, был бәхеткә булыр ине".

Быға оҡшаш мотив фольклор сығанаҡтарында ла осрай. Башҡорттоң шундай ышаныуы бар: яҙын әгәр торна түбән осоп үтһә - уңышҡа. "Торна китһә, торош юҡ" тигән әйтем дә бар. "Сыңрау торна" легендаһында (С. Рыбаков варианты) торналар тауышын изгегә һәм көтөлмәгән бәхеткә юрайҙар. Бер әкиәттә геройға рәхмәтле булған торна уға үҙенән-үҙе тулып торған ашъяулыҡ һәм ҡанат сәсеп алтын табыу һәләтенә эйә торна балаһы бүләк итә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИҪКӘРТЕҮ

# ИШЕҢ ЭРГӘҢДӘ ЙӨРӨЙ ТҮГЕЛМЕ?
## Йәки интернет аша кейәү эҙләгәндәргә бер кәңәш



**Бөгөн "интернет аша таныштыҡ" тигән һүҙҙәр берәүҙе лә аптыратмайҙыр. Танышып, табышып, бәхетле йәшәп киткән йәки осрашып йөрөгәндәр аҙ түгел. Заманы шулай булғас, виртуаль аралашыуҙар ғәҙәти хәлгә әүерелгәс, кемдәрҙелер шундай ысулдар ҡәнәғәтләндергәс, тибеҙ инде...**

Бигерәк тә ниндәйҙер айырым тәртиптәргә ҡоролған тормош алып барыусылар өсөн ҡулайлы ул компьютер. Мәҫәлән, дини кешеләрҙе алайыҡ. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары үҙҙәренең төркөмдәрен булдырып, кейем-һалым, аш-һыу, бала-саға кеүек көнитмеш мәсьәләре хаҡында һөйләшә. Шунда уҡ мосолмандар араһындағы танышыу сайттары ла бар. Һүҙем ана шул сайттар хаҡында. Әлбиттә, улар күптәрҙе бәхетле иткәндер, шунда танышып, оҡшатышып, матур ғаилә ҡороп ебәргәндәрҙе үҙем дә беләм. Ә шул уҡ ваҡытта ошо уҡ сайттар ярҙамында танышып, бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан ҡыҙҙар тарихы ла билдәле.

Туғандарым, дуҫтарым араһында мосолмандар күп булғас, миңә йыш ҡына улар үткәргән сараларҙа, байрам аштарында ҡатнашырға тура килә. Ҡатын-ҡыҙҙар ғына йыйылған урындарҙа, ғәҙәттә, өйләнешеү йәшенә еткән ул-ҡыҙҙары, ҡусты-һеңлеләре хаҡында һүҙ сыға. Һәр кемдең яҡындарын яҡшы ергә урынлаштырғыһы, һәйбәт иш табып биргеһе килә. Шундай бер кисәлә педагогия колледжын тамамлап йөрөгән бер бик һылыу ҡыҙға бер нисә әсәй кеше күҙ һалды. Был ҡыҙ әхирәтемдең балаларын ҡарашырға килеп йөрөй торғайны һәм был әхирәтемә: "Әйҙә, ошо ҡыҙҙы минең улым (ҡустым, ҡәйнешем) менән таныштырайыҡ әле", - тип өндәшеүселәр аҙ булманы. Ҡыҙ, ысынлап та, күркәм дә, аҡыллы ла, матур ҙа, мосолман ҡағиҙәләре менән йәшәй. Үҙем дә йыш ҡына уға ҡарап һоҡлана инем.

Һуңынан әхирәтем һөйләүенсә, Гөлсирәнең (әйҙә, уны шулай атайыҡ) артынан йөрөүсе мосолман егеттәре байтаҡ булған, әммә береһе лә күңелен яулай алмаған. Көндәрҙең береһендә ул интернет аша Питер ҡалаһының бер мосолманы менән танышҡан. Ислам динен ҡабул иткән урыҫ егете Гөлсирә менән матур итеп аралашып, һүҙ һайын шиғырҙар һөйләп, уның иғтибарын яулай. Ҡыҙҙың өйөнә курьер аша сәскәләр ташыта. Бындай романтик мөнәсәбәт кемдең йөрәгенә үтмәһен инде! Оҙаҡламай сәскәләре артынан егет үҙе лә килеп төшә. Ҡыҙ уны ата-әсәһе менән таныштыра. Йәштәр араһында тағы ла бер-нисә айлыҡ хис-тойғоло интернет аралашыуҙар дауам итә һәм был аралашыу өйләнешеүгә алып килә. Балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫкән егет ҡыҙҙың ата-әсәһе йәшәгән ауылда никах уҡытып, кәләшен Питерға алып ҡайтып китә. Һуңынан әхирәтем менән "Бәйләнештә" селтәрендә яҙышыуҙарынан билдәле булыуынса, йәш ғаиләлә бала тыуа ла, улар ҡайҙалыр күсеп китәләр һәм аралар өҙөлә. Тағы ла бер йыл самаһынан әхирәтемә шул уҡ "Бәйләнештә" сайтына ят исем аҫтында Гөлсирә мөрәжәғәт итә һәм унан ярҙам һорай. Улар ғаиләһе менән Төркиәгә йәшәргә күскән булғандар икән. Бер аҙҙан ире Гөлсирәне һәм балаһын таныштарында ҡалдырып, үҙе Сирияға һуғышҡа киткән. Күп тә үтмәй, таныштары уның үлеп ҡалыуы тураһында хәбәр еткергән. Гөлсирә иренең кем булыуын да, ниндәй тормош алып барыуын да белмәй булып сыҡҡан. Ул иренең һуғышҡа китеү-китмәүен дә, ысынлап та үлеме-тереме икәнен дә берәүҙән дә һораша алмай. Таныштары уны, балаһын ҡалдырып, ире өсөн үс алырға китергә өндәй, хатта бурысы тип ҡарай икән. Улар ҡатынды "Рәсәйгә ҡайтырға ярамай, унда һиңә ирең өсөн яуап бирергә тура киләсәк", тип ҡурҡыта. Гөлсирә әхирәтемдән ире хаҡында берәй мәғлүмәт табып биреүҙе һорай. Ошо аралашыуҙан һуң Гөлсирә юғала. Ул хәлгә ике йыл ваҡыт үтеп китте...

Икенсе бер тарихта бала менән тороп ҡалған мосолман ҡатыны интернеттан Төркиәлә йәшәүсе мосолман ире менән таныша һәм оҙаҡ ҡына аралашҡас, барыһын да үлсәп-самалап, уның саҡырыуын ҡабул итә. Төркиәлә йәшәй башлағас, туғандарына төрлө бәхетле фотолар ебәрә. Ләкин оҙаҡламай ағаһына шылтыратып, килеп алыуын үтенә. "Улар тотҡан дин бөтөнләй аңлайышһыҙ, үҙаллы ҡайта алмайым", - ти ул. Туғандары илселек аша уның менән бәйләнешкә инергә маташып ҡарай, тик файҙаһыҙ - һеңлеләренең эҙен юғалталар...

Быларҙы ни өсөн яҙаммы? Яңы ғына дингә баҫып, үҙҙәренә уңышлы иш эҙләгән мосолман ҡатын-ҡыҙҙарын бер аҙ һағайтыу өсөн. Сөнки улар йыш ҡына дини секталарҙың, ислам дине артына йәшеренеп, ҡара эштәр башҡарған төркөм вәкилдәренең ҡорбаны була. Ҡыҙҙарҙың күптәре ысын динде башҡа йоғонтоло тармаҡтарҙан айыра алмай. Үҙҙәре исламға таҙа, пак күңел менән баҫҡас, башҡалар ҙа шулай икән тип уйлай. Ә яуыздар кәләш күҙләгән, ҡатын эҙләгән булып, тап шундайҙарҙы ҡармаҡлай ҙа инде.

Әйтергә теләгәнем шул: хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, интернет аша танышыуҙарҙа һаҡ булығыҙ. Һеҙҙе тейешенсә баһалар егеттәр мотлаҡ ҡайҙалыр диңгеҙ арьяғында тимәгән, улар һеҙ йөрөгән мәсет юлында ла, дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында ла осрарға мөмкин. Ишегеҙҙе интернет аша тапҡанда инде, һайлаған кешегеҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙары, уй-хыялдары, хатта туғандарын, эш урынын тикшереп ҡарау ҙа артыҡ булмаҫ. Ҡыҫҡаһы, бәхетһеҙлеккә осрағандарҙың хатаһы башҡаларға ғибрәтле миҫал булһын ине. "Һаҡланғанды һаҡлармын" тигән бит Аллаһ та.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ЯҢҒЫҘЛЫҠҠА ЫНТЫЛЫУ

"Бәхил бул, цивилизация! Был тәбиғәткә әйләнеп ҡайтыумы? Цивилизация менән бәхилләшеүме? Был хаҡта хыялланыуы еңел ул, ә уны тормошҡа ашырыуы - ауыр. Мин тәбиғәткә ҡайтырға маташып ҡараным. Сәғәтемде ташҡа яра һуҡтым, сәс еткерҙем, ҡырынманым. Ризыҡ эҙләп, пальмаларға үрелдем. Үҙемде хәҙерге донъя менән бәйләүсе барлыҡ ептәрҙе өҙҙөм. Яланаяҡ, яланғул көйө шырлыҡтар араһына инеп, тәбиғәт менән ҡушылырға ҡарар иттем.

Сәстәрем яурынымдан аҫҡа төшөп тора, һаҡал-мыйыҡтарым тауҙай, мине ошо рәүешле күрһәләр, хәҙерге йәштәр "хиппи" тип атарҙар ине. Мин бюрократиянан, техниканан, егерменсе быуаттың тимер ҡыпһыуырынан ҡастым..."

Норвегия сәйәхәтсеһе, яҙыусы Тур Хейердалдың "Фатухива" ("Тәбиғәткә әйләнеп ҡайтыу") тигән әҫәре ошо юлдар менән башлана. Һуңынан Хейердал асығып-талсығып, ҡаҡ һөйәккә ҡалып, әллә нисә төрлө сиргә дусар булып, кешеләргә килеп ауа...

Мине был тарихта шул аптырата: ни өсөн кеше һәр ваҡыт комфортлы йәшәүгә ынтыла ла, тулыһынса комфорт мөхитенә барып эләккәс, кире яңғыҙлыҡҡа, һис юғы, бер аҙға ғына булһа ла, япа-яңғыҙы ҡалырға ашҡына һуң? Әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә менән осрашыр өсөн. Тик быны үҙе генә аңламай...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *"Бер аҙна элек үҙем йәшәгән йортта ябай булмаған визитерҙар - бер төркөм башҡорт һәм татарҙарҙы ҡабул иттем. Улар Оби ҡалаһының француз металлургия заводында эшләйҙәр", - тип яҙа автор.*



ҠЫҘЫҠ ТА, ҠЫҘҒАНЫС ТА...

**Тарихи сығанаҡтарҙың байтағы тикшеренеүселәрҙең иғтибарынан ситтә ҡала. Һәр эҙләнеүсе сикләнгән ваҡыт арауығында үҙен генә ҡыҙыҡһындырған материалды тупларға тырыша бит. Ниндәйҙер документ, баҫмаға юлыҡһа ла, үҙенә кәрәкле булмағанлыҡтан, уларҙың темаһына әһәмиәт бирмәй. Йәиһә бәләкәй генә фактар махсус тикшеренеүгә лайыҡлы түгел, тип табыла. Әммә ғалимдарҙың күҙ уңынан ысҡындырылған мәғлүмәттәр араһында бик ҡыҙыҡлылары ла осрай.**

# ТАРИХ ҠАБАТЛАНАМЫ?

## Йәки XX быуат башында башҡорттарҙың Францияла эшләгәне тураһында



Тарих фәндәре докторы Михаил Роднов үҙенең бер мәҡәләһендә ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та шундай хәл тураһында яҙа. Төп фәнни йүнәлеше иҡтисад, крәҫтиәндәр мәсьәләләре булһа ла, ысын тикшеренеүсе булараҡ, ҡулына килеп эләккән төбәк, халыҡтар тарихына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе лә теркәй бара был ғалим. Командировкаларының береһендә Санкт-Петербург ҡалаһының Рәсәй милли китапханаһында 1913 йылда сыҡҡан "Киевская мысль" гәзитендәге бер мәҡәләгә иғтибар итә. Брюссель ҡалаһындағы үҙ хәбәрсе А.К.-ның "Бельгийская Лена" тип аталған мәҡәләһе була ул. Ә һүҙ бына нимә хаҡында...

1912-1913 йылдың ҡышында Бельгияның баш ҡалаһы Брюсселдәге рус журналисының корпунктына сәйер ҡунаҡтар килеп инә. Европа иленең баш ҡалаһы буйлап эш кейемендә йөрөүсе был кешеләрҙең тышҡы ҡиәфәтенә генә түгел, уларҙың ихтыяр көсөнә, баҙнат итеп үҙен табып килеүҙәренә хайран ҡала журналист. "Бер аҙна элек үҙем йәшәгән йортта ябай булмаған визитерҙар - бер төркөм башҡорт һәм татарҙарҙы ҡабул иттем. Улар Оби ҡалаһының француз металлургия заводында эшләйҙәр (Францияның Төньяҡ департаментындағы Дуэ ҡалаһы эргәһендәге завод)", - тип яҙа автор.

Мәғлүмәттең бик яңғырауыҡлы буласағын һиҙеп, шулай уҡ яҡташтарына ярҙам итеү теләгенән журналист тикшеренеүҙәр үткәрергә ҡарар итә һәм бына нимәләр асыҡлай. "Compagnie Asturienne des mines" тип аталған Бельгия компанияһы көнбайыш Европалағы иң боронғо һәм иң бай ойошмаларҙан иҫәпләнгән. 1831 йылда уҡ асылған был компания Испанияла тутыя (цинк) һәм көмөш мәғдәне сығарған. Европаның төрлө илдәрендә заводтары, металл һатыу конторалары булған. Биржаларҙа акциялары бик юғары баһаланған. Ул ғына түгел, "Астурия компания"һы рус баҙарына ла килеп еткән, Уралдағы төрлө сәнәғәт ойошмалары эшенә ылыға башлаған. Өҫтәүенә, бельгия-француз-испан компанияһы Рәсәй кешеләренең хеҙмәтен ҡулланған, заманса әйткәндә, гастарбайтерҙар йәлеп иткән. Йөҙәрләгән генә түгел, меңәрләгән иратты фабрика-завод эшен әле ишетеп тә белмәгән, арымай-талмай эшләп өйрәнгән төпкөл ауылдарҙан йыйып алғандар. "Компанияның заводтарында, мәҫәлән, меңәрләгән башҡорт, татар, сыуаш, белорус, мордвалар һәм башҡа халыҡтар эшләй", - тип яҙа автор.

Журналисты эҙләп табыусы башҡорттар француз ҡалаһы Обилағы завод эшселәре булып сыға. Улар көмөш-тутыя һәм ҡурғаш мәғдәнен эшкәрткәндәр. Ике мең эшсенең күбеһен итальяндар тәшкил иткән, уларҙан ҡала рустар, чехтар, поляктар һ.б. килгән. Французлар үҙҙәре был заводта эшләмәгән тиерлек. Сөнки эш шарттары ҡот осҡос булған. "Әҙмәүерҙәй башҡорттарҙы иң ауыр, зарарлы, 40-45 градус эҫеләге көкөрт һеркәһе быуында эшләргә ҡушалар. Бындай тамуҡ шарттарына кеше бер нисә ай ғына түҙә алған. Французлар бында бер ниндәй ҙә аҡсаға ялланырға риза булмаған", - тиелә мәҡәләлә.

"Астурия компания"һы эште "юғары кимәлдә" ойоштора белгән дә инде. Журналист асыҡлауынса, директорҙар араһында рус телен белеүселәр, шулай уҡ Өфө губернаһында компанияның үҙ агенты булған. "Ул агент тау һәм далаларҙың ирекле йәш, сәләмәт улдарын һайлап алып, даими рәүештә Францияға оҙата. Егеттәр иһә күп осраҡта кире әйләнеп ҡайтмай". "Нишләп был тиклем алыҫҡа юлландығыҙ һуң?" тигән һорауға, башҡорттар "Ҙур аҡса вәғәҙә иткәнгә", тип яуаплаған. Корпорация ялланыусыларға көнөнә 3 һум, йәғни 9 франк түләргә, йылы фатирҙа йәшәтергә вәғәҙә биргән. Ә ысынында иһә эш хаҡы 5 франк тәшкил иткән, өҫтәүенә, даими рәүештә штраф һалып, ул франк та тартып алынған. Һөҙөмтәлә башҡорттар ҡулдарына аҙнаһына 10-12 франк ҡына ала алған. "Эшселәрҙе ҡот осҡос бысраҡ, һаҫыҡ казармаға урынлаштырғандар. Төрмәләге кеүек, урамға сығыу йә ситтән кемделер индереү рөхсәт ителмәгән. Аҙыҡ-түлекте завод кибетенән генә һатып алырға мөмкин булған. Ундағы хаҡтар иһә үтә юғары, ризыҡтарҙың сифаты насар булған". Завод етәкселеге баштан уҡ эшкә килеүселәрҙең паспорттарын һәм башҡа документтарын йыйып алған. Тел белмәгән кешеләр сит ерҙә яҡлауһыҙ һәм ярҙамһыҙ тороп ҡалған. Ауырығандарҙы ла эшләргә мәжбүр иткәндәр. Рәсәйҙән килгән эшселәрҙең 30 проценты һәләк булған, кешеләр каторганан ҡасҡан һымаҡ ҡасып киткән, тип һөйләгән башҡорттар журналисҡа.

Компания сит ил эшселәренең һәр аҙымын күҙәткән. "Рус, хатта башҡорт, татар телдәрен белгән махсус кешеләр уларҙың арттарынан ҡалмай йөрөгән һәм шунда уҡ ишетелгән бар хәбәрҙе завод директорына еткергән". Ғәйеплеләргә штраф һалынған. Французлар үҙҙәренең закон боҙоуын белгәнгә күрә лә, эшселәренә үҙ-ара аралашырға ирек бирмәгән. "Бик һирәктәр генә тыуған яҡҡа ҡайтырға рөхсәт алыуға ирешә", - тип һөйләгән башҡорттар. Бер йыл буйы эшләп, фирмаға бер ниндәй бурысы булмағандарҙы йыл тулыуға бер аҙна ҡалғас эштән ҡыуып сығарғандар.

Был ир-егеттәр нисек эш урынынан ҡасып, журналисты таптылар икән, тигән һорау тыуа. "Миңә килгән башҡорттар йәшерен рәүештә, дошман тотҡононан ҡасҡандай, сығып һыҙғандар. Улар артынан жандармдар ҡыуа төшкән, әммә башҡорттар Бельгияның нейтраль еренә сығып өлгөргән", - тип яҙа журналист. Оби ҡаласығынан Бельгия батшалығы сигенә тиклем 10 саҡрым самаһы, ә Брюсселгә тиклем - 40. Башҡорт егеттәре эҙәрлекләүҙән ҡасып, ҡыш көнөнә ҡарамай, "һә" тигәнсе Европа башҡалаһына килеп ингән.

Журналист яҡташтарына ярҙам итер өсөн ҡулынан килгәнден барыһын да эшләгән. Был ваҡиға фашланған, тик компания эшселәрҙең паспорттарын биреүҙән баш тартҡан. "Өсөнсө ай инде паспорттарҙы бирмәйҙәр", - тип һүҙен дауам итә хәбәрсе. Күрәһең, был ваҡиғанан Бельгиялағы Рәсәй вәкиллеге лә ситтә ҡалмаған, суд эше ҡуҙғатылған. Франктарын ала алмаһалар ҙа, яҡташтарыбыҙға тыуған яҡтарына ҡайтыр өсөн кәртә ҡалмай. Әммә Европала аҡса эшләп байырға теләүсе ватандаштырыбыҙҙың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Францияның Оби ҡаласығы (8 меңгә яҡын кеше йәшәй) бөгөн дә тутыя сығарыу буйынса ҙур үҙәк иҫәпләнә. Бында тутыя сығарыу буйынса донъяла беренсе урында торған Нирстар (Nyrstar) компанияһының предприятиеһы урынлашҡан. Бөгөн ундағы эш шарттарының ниндәй икәнлеген, кемдәр эшләүен фаразларға ғына ҡала...

Хәҡиҡәт нимәлә? Тарихтың, ваҡиғаларҙың ҡабатланыуында. Бөгөн дә ир-егеттәребеҙ "оҙон аҡса" артынан ҡыуып, ниндәй тарафтарға ғына сығып китмәй, Себер ҡыҙыра. Улар араһында маҡсатына өлгәшеп, байығандар ҙа барҙыр. Әммә үҙен юғалтҡандар, бәләгә тарығандар, табут менән ҡайтҡандар ҙа етерлек бит. Уйлан әле, ир-егет! Бәлки, аяҡ аҫтында ғына яталыр ул һинең ситтән эҙләгәнең?

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Башҡорт ихатаһының характеры ла бер ни тиклем үҙгәрә: мал тотолған арандар баҡсаға әйләндерелә, урам бәләкәйләнә һәм барлыҡ хужалыҡ ҡоролмалары - аласыҡ, аҙбарҙар шунда төҙөлә.

Заманса башҡорт ауылына хас булған үҙенсәлек тип өй алдарында урам яғынан бәләкәй баҡсаларҙың киң таралыуын килтерергә була. Элегерәк, бигерәк тә ялан райондарында, улар бик һирәк күренеш ине. Ниһайәт, күпселек ауылдарҙа, революцияға тиклем башҡорттар хатта хыялланмаған да электр уты яна.

Заманса башҡорт кейемендә лә, өйҙәрҙе йыйыштырыуҙағы кеүек, ололарҙа - элеккене һаҡлау, йәштәрҙә яңыға ынтылыу күҙәтелә. Коллективлаштырыу һәм эре ауыл хужалығы менән шөғөлләнеү һөҙөмтәһендә кәсепселек - буҫтау, күн һәм тире эшкәртеү, кейем һәм аяҡ кейеме тегеү элекке әһәмиәтен юғалта. Хәҙерге ваҡытта башҡорттарҙың кейеме һәм кейем тегеү өсөн фабрика материалдары ҡулланыла. Ауылдың оло йәштәге кешеләре боронғо типтағы көндәлек кейемдәрҙе кейә. Баҫа тун, ҡама бүрек, һаҡал, селтәр, яға, уҡалы елән, елкәлек һ.б. кейем һәм биҙәүестәр һандыҡтарҙа һаҡлана. Улар бейеүҙәр ваҡытында йәки колхоз йәштәренең үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәге ҡуйған постановкаларҙа ғына ҡулланыла.

Бары тик төньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа урыны менән ҡатын-ҡыҙҙар милли кейемдә йөрөй.

Урта йәштәге быуында, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа, кейемдәр ябайлаштырыла. Мәҫәлән, күлдәктәр иҙеүһеҙ тегелә, итәктәге дүрт ҡоршау урынына берәү генә ҡуйыла. Ҡайһы бер урындарҙа (Әбйәлил районы) биш-алты йыл элек кәмзүлдәрҙе биҙәүҙә яңы мода барлыҡҡа килде. Быға тиклем ҡатын-ҡыҙҙар кәмзүле тар ғына уҡа менән биҙәлеп, көмөш тәңкәләр ҡаптырмаға тегелһә, хәҙерге ваҡытта, һаҡалдар ҡулланылыштан сыҡҡас, уларҙан ҡырҡып алып, кәмзүлдәрҙең биленә биш-алты рәт итеп тәңкә тегәләр.

Башҡорт йәштәре, ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа, ҡаласа, промтауарҙар магазининан һатып алған йәки заманса мода буйынса тектерелгән костюмдар кейә. Быны ҡатын-ҡыҙҙар прическаһына ҡарата ла әйтергә була.

Ауыл тормошоноң яңы ҡоролошо юлдарҙа ла сағылыш тапмай ҡалмай. Бик һирәк урындарҙан башҡа, Башҡортостандың таулы-урманлы райондарында һыбайлылар йөрөгән юлдар арба юлына әйләндерелгән, бөтөн ерҙә лә автомобиль транспортына ҡулайлаштырылған тракттар үтә. Шуға күрә эйәрҙәр көнкүрештә бары тик малсылыҡ алға киткән райондарҙа, көтөүселәрҙә генә һаҡланған. Күп колхозсыларҙың велосипедтары, ҡайһы берҙәренең мотоциклдары бар. Күпселек йөк һәм еңел машиналарға эйә. Баҙар көнөндә Башҡортостандың теләһә ҡайһы район үҙәгендә колхоз тауарын алып килгән йөк машиналарын ғына түгел, үҙ тауарын һатырға килеүселәрҙе лә, һатып алыусыларҙы ла күрергә мөмкин.

Механизацияланған транспорт ауыл халҡының, атап әйткәндә башҡорттарҙың көнкүрешенә ныҡлы үтеп ингән.

Башҡорт крәҫтиәненең бөтөн производство тормошо баҫыу бригадаларында йәки фермала үтә. Коллектив производство процесында колхозсыларҙың квалификацияһы арттырылып ҡына ҡалмай, хеҙмәткә аңлы социалистик ҡараш та тәрбиәләнә.

*✓ Ә бит нуғайҙар үҙҙәре айырым халыҡ. Нуғай далаларына барып, һеҙ - татар, тип әйтеп ҡарағыҙ, нисә минут йәшәрһегеҙ икән? Әммә ҡайһы берәүҙәр быны шундай уйҙырмалар сығарып, күп томлығыбыҙға тәнҡит яуҙыра.*



**Башҡорт ырыуҙары тураһында фундаменталь китап сығара башлап, Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй тарихында тиңе булмаған күренешкә нигеҙ һалды республикабыҙ тарихсылары. Күптән түгел уның авторҙары, тарих фәндәре кандидаттары - тележурналист, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Салауат ХӘМИҘУЛЛИН менән БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының Этнология бүлеге мөдире Юлдаш ЙОСОПОВ Мәскәү ҡалаһында ошо проекттың исем туйын үткәреп, уның менән таныштырып ҡайтты. Илебеҙҙең баш ҡалаһында үткән түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар проектты нисек баһаланы икән? Ошо һорауҙан башланып киткән әңгәмәне бөгөн гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

**С. Хәмиҙуллин:** Резолюциянан сығып, шулай тиергә мөмкин: эшебеҙ Рәсәйҙә генә түгел, хатта БДБ киңлегендә аналогы булмаған уникаль проект тип танылды. Ул тарих, гендар географияһы, сығанаҡтар менән эшләү һ.б. күҙлектән ҡарағанда, иң яңы методологияны ҡулланыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Шуға, минеңсә, хеҙмәтебеҙ иң юғары баһаға лайыҡ. Хатта түңәрәк ҡорҙоң ябай учреждениела түгел, ә Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институтында үтеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй - ул ябай ғына төбәк институты түгел, ә илдең алдынғы көнсығыш белгестәрен андырҙы. Быны хатта ойоштороусылар үҙҙәре лә таныны. Сара өс сәғәт барҙы, берәү ҙә ултырғысында борғоланып, ҡасан бөтә инде, тип ултырманы, һәр кем һәр һүҙҙе иғтибар менән тыңланы.

Түңәрәк ҡорҙа Рәсәй Фәндәр академияһы Медик-генетик үҙәгенең алдынғы генетигы Елена Балановская, МДУ-ның Антропология институты антропологы Андрей Мауэр, РФА-ның мөхбир ағзаһы - Рәсәй буйынса алдынғы лингвист-төркиәтсе Анна Дебо һ.б. ҡатнашты. Улар барыһы ла беҙҙең хеҙмәтте хупланы, йәғни төрлө белгестәр этностың барлыҡҡа килеүе, лингвистика теорияһы буйынса үҙҙәренең фекерен әйтеп, был эштең, һис шикһеҙ, ҙур әһәмиәткә эйә булыуын белдерҙе. Әгәр быға саса башҡорттарҙы өйрәнеүҙә Руденконың, Кузеевтың, Әсфәндийәровтың эштәре менән таныш булһаҡ, беҙ уларҙың хеҙмәтен артабан дауам итеп, уны яңы кимәлгә күтәрҙек, тип әйтә алабыҙ. Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусыларҙың эшебеҙҙе таныуы һәм дөрөҫ юлдан барыуыбыҙға тағы ла бер тапҡыр инандырыуҙары һөҙөмтәһендә эш артабан да дауам итәсәк, һәм беҙ аныҡ юлыбыҙҙы күҙаллайбыҙ.

**▸ Башҡорт ырыуҙары тураһында күп томлыҡ нәшер итеү идеяһы, ғөмүмән, проект нисек тыуҙы һәм быға нимә этәргес бирҙе?**

**С. Хәмиҙуллин:** 2005 йылдарҙа Шәжәрә байрамдары ойошторолоп, уларҙың идеяһы ҡасандыр башҡорт булып та, үҙенең асылын юғалтҡан төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына тамырҙарына ҡайтырға ярҙам итеү булды. Ыңғай һөҙөмтә күренгәс, шул ваҡытта уҡ, эх, ырыуҙар тураһында китап сығарырға ине, тип уйлана башланым, әммә был идея менән минән башҡа янып йөрөүселәр ҙә булғанлығын белмәнем. Үҙ эшемде телевидениела башҡорт ырыуҙары буйынса "Башҡорт шәжәрәләре" тигән тапшырыуҙан башланым, ә Юлдаш менән Рәфил Аҫылғужин был ваҡытта районлар буйлап, лекциялар уҡып йөрөгән. Ул саҡта бер-беребеҙҙе белмәй ҙә инек әле. Һуңынан осрашҡас, барлыҡ мәғлүмәттәрҙе туплап, уларҙы көсәйтеп, фундаменталь хеҙмәт башларға ҡарар иттек. Шулай итеп, ҡасандыр айырым-айырым килгән фекерҙәр, уйҙар беҙҙе бер командаға туплап, бынан ике йыл элек тормошҡа аша башланы.

**Ю. Йосопов:** Беҙ төрлө өлкә һәм учреждение кешеләре - этнограф, журналист, философ. Бер фекергә айырым-айырым килһәк тә, төрлө ысулдар менән бер үк йүнәлештә эш алып барғанбыҙ булып сыҡты. Һуңынан осрашып, берләшеп, кем ошо тема менән ҡыҙыҡһына, шуларға ошо йүнәлештә берләшергә саҡырыу ташланыҡ. Һәм ҡайҙа ғына булмайыҡ, һәр ваҡыт, әгәр уникаль материалдарығыҙ бар икән, хеҙмәттәшлек итергә әҙербеҙ, шәп материалдар көтәбеҙ, тип белдерә йөрөйбөҙ.

**С. Хәмиҙуллин:** Йәғни был баҫма - ул коллектив хеҙмәт емеше, унда һәр кем ҡатнаша ала. Һәр томды алып ҡараһағыҙ, унда ҡатнашыусылар һаны, йәғни авторҙар коллективы төрлөсә. Беҙгә дан түгел, һөҙөмтә кәрәк. Шуға күрә, крайҙы өйрәнеүселәрҙән шәжәрәләр, фотолар, йәғни сеймал алабыҙ. Әлбиттә, баҫма крайҙы өйрәнеү буйынса түгел, ә фәнни булғанлыҡтан, крайҙы өйрәнеүселәр төп ролде уйнамаһалар ҙа, уларҙың да ярҙамына таянабыҙ.

**Ю. Йосопов:** Крайҙы өйрәнеүселәр, нигеҙҙә, ойоштороу буйынса ҙур ярҙам күрһәтә. Сөнки беҙ һәр саҡ юлда, ә теге йәки был районда крайҙы өйрәнеүселәр хакимиәт вәкилдәре менән бергә ауылдар буйлап йөрөтөүҙе, материал туплауҙы ойоштора. Аллаһы Тәғәлә бер үк идеяны бер үк ваҡытта бер нисә кешегә бирә, тип юҡҡа әйтмәйҙәрҙер, күрәһең. Был осраҡта ла ошо фекер ҡайҙалыр һауала эленеп торған һәм бер нисә кешенең башына уй төшөп, тап беҙҙең ошо коллективта тормошҡа ашырға тейеш булғандыр.

**▸ Салауат Ишмөхәмәт улының шундай бер фекере хәтергә уйылып ҡалған: "Башҡортостанда йәшәүселәр ҙә бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлап алды: кемдең ырыуы бар, ул - башҡорт, ә кемдеке юҡ - ул татар милләтенә ҡарай". Шәжәрә тураһында ла шул уҡ фекерҙе әйтергә мөмкинме һәм милләтте билдәләгәндә шәжәрә лә ырыу кеүек үк төп роль уйнай, тип ныҡлы итеп раҫларға буламы?**

**С. Хәмиҙуллин:** Мин бында шәжәрәгә бик баҫым яһамаҫ инем, сөнки документтар буйынса һәр кем шәжәрәһен төҙөй ала һәм хатта улар башҡорттарҙыҡы кеүек тәрән тамырлы булмаһа ла, барыбер шәжәрә тип атала. Ә бына Урал-Волга буйы төбәгендә ырыу-ҡәбилә структураһы бары тик беҙҙә - башҡорттарҙа ғына.

**Ю. Йосопов:** Бында шуны ла әйтмәй булмай - беҙҙең оппоненттар, бигерәк тә Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының Ш. Мәржәни исемендәге Тарих институты вәкилдәренең ҡайһы берҙәре тарафынан саф башҡорт ырыуҙарын татар ырыуҙары һ.б. тип күрһәтергә тырышыу күҙәтелә, хатта юрматы ырыуын да татар ырыуы тип яҙҙылар. Ә халыҡтың ҡулына ошо хеҙмәттәр килеп эләкһә, уларҙың башы бутала, бына мин - гәрәй ырыуы татары, ти башлай. Улар үҙҙәрен нисек атаһа ла - үҙ мәйелдәрендә. Әммә беҙ академик кимәлдән сығып фекер йөрөтәбеҙ, шөкөр, ялған тарихсылар кимәленә төшмәйбеҙ. Бая атап үткәнемсә, Руденко, Кузеев, Әсфәндийәровтың хеҙмәттәренә нигеҙләнәбеҙ. Кузеев тап башҡорттарҙа ырыу йәмғиәте булыуын, ә татарҙарҙа булмауын теркәгән. Шуға күрә фәнни сиктәрҙән ситләшергә тейеш түгелбеҙ, быының эҙемтәләре бик насар һәм ялған тарих

# МӘСКӘҮ ҒАЛИМДАРЫ

## башҡорт ырыуҙары

бергә туплаған академик вуз. Уны алдынғы ғәрәп илдәре белгесе, фекеренә барлыҡ дәүләт учреждениеларында һәм хатта махсус хеҙмәттәр ҙә ҡолаҡ һалған эксперт Виталий Наумкин етәкләй. "Көнсығыш" тип аталған журнал нәшер иткән һәм билдәле ғалимдар эшләгән вузда презентация уҙғарыу, әлбиттә, күп нәмә хаҡында һөйләй.

Институтта бер нисә үҙәк бар һәм " Үҙәк Азия, Кавказ һәм Урал-Волга буйы үҙәге" етәксеһе Аликбер Аликберов ҡултамғаһы ҡуйылған резолюция беҙҙең проектҡа яңы офоҡтар аса һәм был эш мотлаҡ дауам ителергә тейеш, тип билдәләнә.

**Ю. Йосопов:** Дөрөҫөн әйткәндә, ошо һөйләшеүҙә ҡатнашыуыбыҙ һәм юғары баһа бирелгән резолюция был хеҙмәттең ғәмәлдә ғилми әһәмиәткә эйә икәнлеген академик даирәлә таныу булды. Фәндә билдәле бер сиктәр, методология, ҡағиҙәләр һ.б. үҙенсәлектәр бар. Эш алып барғанда шул сиктәрҙән сыҡмаҫҡа тырышабыҙ. Мәскәүҙә үткән түңәрәк ҡорға тиклем хеҙмәтебеҙ буйынса ғилми даирәләрҙә адекват тәнҡит булғаны юҡ ине әле. Эйе, тәнҡит булырға тейеш һәм ул кәрәк тә. Ә ошоға тиклем киң мәғлүмәт саралар ында проектыбыҙҙы насар итеп күрһәтергә тырышыуҙар булды һәм был резолюция ошондай шикләнеүселәргә төплө дәлил булып тора ла инде.

Түңәрәк ҡорҙоң ғәҙәти ваҡиға кеүек кенә үтмәүе лә ҡыу-



*Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусыларҙың барыһы ла беҙҙең хеҙмәтте хупланы, йәғни төрлө белгестәр этностың барлыҡҡа килеүе, лингвистика теорияһы буйынса үҙҙәренең фекерен әйтеп, был эштең, һис шикһеҙ, ҙур әһәмиәткә эйә булыуын белдерҙе. Әгәр быға саса башҡорттарҙы өйрәнеүҙә Руденконың, Кузеевтың, Әсфәндийәровтың эштәре менән таныш булһаҡ, беҙ уларҙың хеҙмәтен артабан дауам итеп, уны яңы кимәлгә күтәрҙек, тип әйтә алабыҙ. Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусыларҙың эшебеҙҙе таныуы һәм дөрөҫ юлдан барыуыбыҙға тағы ла бер тапҡыр инандырыуҙары һөҙөмтәһендә эш артабан да дауам итәсәк, һәм беҙ аныҡ юлыбыҙҙы күҙаллайбыҙ.*

диңгеҙенә батыуыбыҙ ҙа ихтимал. Урындарҙағы крайҙы өйрәнеүселәргә лә фәнни күҙлектән сығып эшләргә, фәнни фекерләргә йүнәлеш бирәбеҙ. Бары тик шул ғына үҙенең шәжәрәнде, үҙенең ырыуыңды өйрәнеүҙә уңыш нигеҙе булып торасаҡ.

**С. Хәмиҙуллин:** Әгәр беҙ ҙә, мең ырыуы - нуғай ырыуы, нуғайҙар - татар, тимәк, мең ырыуы ла татарҙар, тигән һымағыраҡ уйҙырмаларға юл ҡуйһаҡ, беҙ ҙә әкиәт оҫталары буласаҡбыҙ. Ә бит нуғайҙар үҙҙәре айырым халыҡ. Нуғай далаларына барып, һеҙ - татар, тип әйтеп ҡарағыҙ, нисә минут йәшәрһегеҙ икән? Әммә ҡайһы берәүҙәр бына шундай уйҙырмалар сығарып, күп томлығыбыҙға тәнҡит яуҙыра. Беҙ уларҙың кимәленә төшөргә лә, кем менәндер талашырға ла, ул ғына ла түгел, уйҙырмалар уйлап сығарырға ла йыйынмайбыҙ. Сөнки тарихыбыҙ шул тиклем бай, алдаҡ тарих яҙырға һис урын юҡ. Беҙгә барлыҡ булған тарихыбыҙҙы тарих төпкөлөнән һөйрәп сығарып күрһәтергә генә кәрәк, һәм беҙ ошо юлдан барабыҙ ҙа инде.

**▸ Бер әңгәмә ваҡытында Гүзәл Ситдиҡова, милләтте милләт иткән дүрт бағана бар - тел, ер, дин, ҡан берлеге, тигәйне. Ырыуҙарҙы, милләтте асыҡлағанда генетик маркерҙарға мөрәжәғәт итәһегеҙ. Бөгөн тарихи тамырҙарҙы генетик анализ ярҙамын-**

✓ *Мин генетик түгел, мин - тарихсы, этнограф һәм миңә Арғаяш районы башҡортоноң Тәтешле районы башҡортона, Яңауыл районы башҡортоноң Хәйбулла районы башҡортона туған булыуы ҙур асыш булды.*



**да асыҡлағанда алынған мәғлүмәттәрҙе бер нисек тә үҙгәртеү мөмкин түгел һәм быны берәү ҙә инҡар итә алмай. Шул хаҡта ла ентекләберәк һөйләп китһәгеҙ ине.**

**Ю. Йосопов:** Гендар географияһы фән булараҡ уҙған быуаттың 30-сы йылдарында уҡ барлыҡҡа килә. СССР-ҙа генетика фәненә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Александр Серебровский уны тарих фәне тип билдәләй, йәғни баштан уҡ тарихты һәм халыҡтарҙы өйрәнеүгә йүнәлеш ала. Ул ваҡытта хәҙерге ысулдар, гаплотөркөм, гаплотип тигән атамалар ҙа булмай. Шуға ҡарамаҫтан, яҡынса принцип һаҡлана. Башҡорттарҙы совет осоронда уҡ РФА Өфө ғилми үҙәгенең Биология, генетика, биохимия институтында өйрәнә башлайҙар. Был йәһәттән Эльза Хөснөтдинова күп эшләй.

Беҙ бынан өс йыл элек эш башланыҡ һәм Елена Балановская менән берлектә эшләйбеҙ. Баштан уҡ беҙ (этнографтар, гуманитарийҙар) барлыҡ этаптарҙы ла (бергә экспедицияларға сығыу, мәғлүмәттәрҙе бергәләп эшкәртеү, лаборатор ысулдарҙы - молекуляр биология, ДНК-ны бүлеү, уны типлаштырыу, анализ эшләү, селтәрҙәр төҙөү, уларҙың аңлатмаһын биреү) бергә үтергә тейешбеҙ, тигән һығымтаға килдек. Сөнки гендар географияһын өйрәнгәндә шулай ғына билдәле бер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Генетиктарҙың, биологтарҙың төп проблемаһы шунда ла инде - улар был өлкә буйынса махсуслашмаған һәм этностың айырмалыҡтарын билдәләй алмай, йәғни улар мөһим күрһәткес: башҡорттарҙы - ырыуҙар, сыуаштарҙы этнографик төркөмдәр буйынса бүлмәй. Махсус өйрәнә башлағас, беҙ ҙә, генетиктар ҙа тап ошоно күрҙек һәм был ысулдың бик һөҙөмтәле булыуын, эш барышында әллә күпме процесты күрергә мөмкин булыуын, этностың ҡасан айырылыуын һәм һәр берләшмә буйынса нисек һаҡланғанын күрҙек. Эйе, беҙ милләттең ҡайҙан килеп сығыу мәсьәләһен ахырынаса хәл итә алмайбыҙ. Мәҫәлән, теге йәки был төбәккә бәйләнеш бар, ниндәйҙер халыҡты бер гаплотөркөмгә йәки ырыуға бәйләргә мөмкин. Минеңсә, тап ошоға иғтибар бирергә һәм ошо йүнәлештә эште артабан дауам итергә кәрәк. Әгәр киләсәктә башҡорттарҙың ырыуҙарға бүленгән генофондының картаһын төҙөһәк, лингвистар ошо башланғысты күтәреп алып, үҙҙәренең йүнәлеше, үҙ системалары буйынса тикшеренеүҙәр үткәреп, уларҙың күпмегә тура килеүҙәрен сағыштырып ҡараһа, бик яҡшы булыр ине. Әлегә беҙ бары тик нимәлер эшләргә тырышабыҙ ғына һәм был эш киләсәккә төбәлгән.

**Һүҙ ыңғайы Башҡортостанда гаплотөркөмдәр буйынса өс ҙур кластер бар, тип әйтеп киттегеҙ. Уларға ла ентекләп туҡталып үтмәйекме икән?**

**Ю. Йосопов:** Көнбайыш Евразия гаплотөркөмө тип һаналған һәм бронза быуаты, иртә тимер быуаты сигендә һинд-иран ҡәбиләләренең миграцияһына бәйле булған *R1a* төп гаплотөркөм булып тора. Ул үҙе өс төп кластерға бүленә һәм уларҙың иң ҙуры төньяҡ-көнсығыш башҡорттарына ҡарай. Йәғни уға Учалы районының көньяғынан башлап Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Мәсетле, Салауат, Дыуан, Ҡариҙел, Асҡын, Балтас, Тәтешле, Яңауыл, Силәбе өлкәһенең Арғаяш районлары инә. Бәлки, Силәбенән арыраҡ та дауам итәлер. Был райондар барыһы бер кластерҙы тәшкил итә һәм Учалы районы башҡорттары менән Балтас башҡорттары туғандар тип әйтергә мөмкин. Беҙ уларҙы шартлы рәүештә табындар, тип атайбыҙ, сөнки табындар унда компактлы йәшәй. Был кластерҙың нейтраль атамаһы - төньяҡ-көнсығыш. Был Көнбайыш Себер, Көньяҡ Урал алды, Урал алды территориялары менән бәйле ҙур массив, һәм, минеңсә, ул башҡорттарҙың дөйөм оҡшашлығын сағылдыра, йәғни *R1a* генотибын йөрөтөүселәр - үҙҙәре эргәһенә башҡа ҡәбиләләрҙе туплаған боронғо башҡорттар. Икенсе *R1a* - ҡыпсаҡ төркөмө лә бик ҙур һәм ул Төньяҡ Кавказ, Каспий алды территорияһына ҡарай, йәғни бында Көнбайыш Дәште-Ҡыпсаҡтың ялан халҡы йәшәй. Ҡыпсаҡ атамаһы ла ошоға күрһәтеп тора. Һәм өсөнсө - бәләкәй кластер - юрматылар. Улар үҙҙәре айырым һөйләшеү талап итә, сөнки улар барлыҡ гаплотөркөмдәрҙән дә айырылып торған, бергә тупланып, башҡалар менән оҙаҡ бәйләнешкә инмәй йәшәгән халыҡ.

Икенсе ҙур төркөм *N1c*. Әгәр *R1a* тарҡауыраҡ булһа, *N1c* тупланғаныраҡ. Уның ареалы Уралдан Алтайғаса һәм уның Урал-Алтай миграция циклы һөҙөмтәһе, күсмә халыҡтар менән бәйле икәнлеге асыҡ күренә. Был төркөмгә - түңгәүер, мең, уран, үҫәргән, көнбайышта йылан ырыуҙары инә. *R1a* Яңауыл районына етеп туҡтаһа, Яңауылдан Ейәнсура районына тиклем *N1c* гаплотөркөмө һуҙыла. Йәғни ул тотош Урал алдын үҙ эсенә ала: уға Яңауыл, Илеш, Туймазы, Йәрмәкәй, артабан мең ырыуы райондары инә. Был, ошо ареалда төрки-уғыр ҡәбиләләренең үҙ-ара бәйләнеше булғандыр, моғайын, тигән күҙаллауҙарға этәрә, сөнки һуңғы һығымтаны яһарға иртәрәк, эш яңы саҡ башланып ҡына тора.

Һәм башҡорттарҙа булған иң билдәле гаплотөркөм - *R1b*. Уның хаҡында уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ һөйләй башлағандар, шулай уҡ ул көнбайышта ла телдән төшмәй, бынан бер нисә йыл элек Башҡортостанды ла шаулатты. Был башҡорттар - бөрйәндәр - кельт гаплотөркөмөнә ҡарай. Икенсе массив - ғәйнәләрҙә һаҡланып ҡалған. Уның сығышы иран ҡәбиләләренә барып тоташа. Бөрйән ҡәбиләһендә булған *R1b* гаплотөркөмө Каспий алды территорияһы халҡы - Көнбайыш Ҡаҙағстан, Манғышлаҡ менән бәйле булыуы ихтимал. *R1b* гаплотөркөмөнөң үҙенсәлекле төрө Көньяҡ Уралда табылып, был хаҡта уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында уҡ билдәле була. Әммә уның маркировкаһы *M73*. Һуңғы ваҡытта асыҡланыуынса, ул тамъяндарға һәм йыландарҙың ҡайһы бер өлөшөнә хас.

**С. Хәмиҙуллин:** Һөҙөмтәлә улар барыбер иран сығышлы була. Бер өлөшө Алтайға барып сыға һәм хәҙерге Алтай халыҡтарының этногенезында ҡатнаша. Һуңынан улар Уралға күсенә. Ә был *R1b*, *N1c* гаплотөркөмдәре туранан-тура бәйле һәм ҡасандыр уртаҡ бер атай-олатайҙан таралған. Ниндәйҙер ваҡытта айырылып, һуңынан ҡабат тупланғандар.

Ҡайһы бер халыҡта, винегрет кеүек, төрлө төрҙәр буталған. Ә ҡайһы бер халыҡтарҙа, мәҫәлән, башҡорттарҙа, ҙур өс кластер бар. Әгәр ниндәйҙер халыҡта "винегрет" икән, тимәк, ул йәш этнос. Ә ҙур, тупланған өлөштәр ни тиклем күберәк, халыҡ шул тиклем боронғораҡ.

Мин генетик түгел, мин - тарихсы, этнограф һәм миңә Арғаяш районы башҡортоноң Тәтешле районы башҡортона, Яңауыл районы башҡортоноң Хәйбулла районы башҡортона туған булыуы ҙур асыш булды. Генетик планда тикшеренеүҙең бына ошо яғы ҡыҙыҡлы. Ә ҙур өлөштәргә килгәндә инде, әйтеп китеүебеҙсә, ҙур өс кластер булыуы халыҡтың гомоген, йәғни бер төрлөләгән күрһәтә. Антропологик тип төрлө булыуы ихтимал, әммә генотип бер үк. Раса төрҙәре үҙгәреш кисерһә лә, генотип үҙгәрешһеҙ ҡала.

**Милләттең этногенезына миграция ҙур йоғонто яһай. Әйтеп китеүегеҙсә лә, башҡорт этносы формалашыуға төрлө миграция процестары үҙ йоғонтоһон яһай, үҙ эҙен ҡалдыра. Был күсенеүҙәрҙең төп сәбәптәрен күҙалларға мөмкинме?**

**С. Хәмиҙуллин:** Кеше бер ваҡытта ла бер урында ултырмай, шуның кеүек, кешелек тарихы ла миграцияларҙан тора, һәм был аксиома. Әммә икенсе яҡтан ҡарағанда, мәҫәлән, яҙыу барлыҡҡа килеүгә мең ярым йыл тибеҙ икән, тарих өсөн был ваҡыт бер секунд ҡына. Хәҙер кешелек тарихы миллион йылдар менән иҫәпләнә. Күҙ алдына килтерегеҙ - ошо миллион йылдар эсендә кешеләр климат, һуғыштар, сәйәсәт, ауырыуҙар сәбәпле һәр саҡ күсенергә мәжбүр булған. Өҫтәүенә, борон улар яңы ерҙәрҙе үҙләштереү менән дә шөғөлләнгән. Уйлап ҡараһаҡ, Гавай халҡын Яңы Зеландияға сығып китергә нимә мәжбүр иткән һәм унда каноэларҙа барып етеү өсөн ниндәй тәүәккәллек кәрәк? Барлыҡ миграция процестары шулай дауам иткән, әммә был бик борон булған. Ләкин беҙгә ул Нух заманында кеүек күренһә лә, Ер тарихы өсөн был ни бары бер миҙгел генә.

**Ю. Йосопов:** Мәскәү ғалимдары, шул уҡ Е. Балановская гаплотиптарҙың үҙгәреү картаһын төҙөгән. Унда күсмә тормош алып барыусы ҡәбиләләрҙең миграцияһы асыҡ күренә. Йәғни күсмә тормош алып барыусыларҙа алмашыныу, миграция тиҙлеге ҙур. Ә ултыраҡ тормош менән ергә ерегеп йәшәүселәрҙә миграция яй бара. Монголиянан алып Көнсығыш Европаға тиклемге ялан территорияһында генофонд өс-дүрт быуын эсендә тамырынан үҙгәрергә мөмкин.

**Гуманитар тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты, коллегағыҙ Рәфил Аҫылғужин Башҡортостанда Ҡурған өлкәһе башҡорттарының мәҙәниәт көндәре ваҡытында, ҡурғандарҙың үҙенсәлеге шунда, уларҙа башҡа бер ерҙә лә осрамаған ҡалмаҡ ырыуы һаҡланып ҡалған, тигәйне. Символик рәүештә башҡорттоң ете ырыуы тураһында һөйләһәк тә, халҡыбыҙҙа нисә ырыу бар һәм бөгөн уларҙың күпмеһе бар, ҡалмаҡ ырыуы кеүек айырым бер урында ғына һаҡланып ҡалыусы башҡа ырыуҙар бармы?**

**С. Хәмиҙуллин:** Алтын Урҙала ете ырыу берләшмәһе була. Уға бик күп башҡорт ҡәбиләләре инә. Ул ваҡытта уларҙы башҡорттар тип тә атамағандарҙыр, бәлки. Хәҙерге ваҡытта ете ырыу тураһындағы хәтер бары тик беҙҙә һәм ҡаҙаҡтарҙа ғына һаҡланып ҡалған. Башҡорттарҙа ете ырыу Урал аръяғының бер нисә ҡәбиләһен үҙ эсенә ала. Әле был атама барлыҡ башҡорт халҡының синонимы ғына булып йөрөй, сөнки беҙҙең яҡынса 40-тан ашыу ырыу-ҡәбиләбеҙ бар. Төп массанан хәҙерге ваҡытта Пермь крайында һәм Татарстан Республикаһында йәшәүсе ғәйнәләр, байлар, юрмыйҙар, бүләрҙәр, йәнәйҙәр генә төшөп ҡалған.

(Дауамы 12-се биттә).

# БАҺАЛАНЫ...




## тураһындағы күп томлыҡты



*Алтын Урҙала ете ырыу берләшмәһе була. Уға бик күп башҡорт ҡәбиләләре инә. Ул ваҡытта уларҙы башҡорттар тип тә атамағандарҙыр, бәлки. Хәҙерге ваҡытта ете ырыу тураһындағы хәтер бары тик беҙҙә һәм ҡаҙаҡтарҙа ғына һаҡланып ҡалған. Башҡорттарҙа ете ырыу Урал аръяғының бер нисә ҡәбиләһен үҙ эсенә ала. Әле был атама барлыҡ башҡорт халҡының синонимы ғына булып йөрөй, сөнки беҙҙең яҡынса 40-тан ашыу ырыу-ҡәбиләбеҙ бар. Төп массанан хәҙерге ваҡытта Пермь крайында һәм Татарстан Республикаһында йәшәүсе ғәйнәләр, байлар, юрмыйҙар, бүләрҙәр, йәнәйҙәр генә төшөп ҡалған.*

**✓ Беренсенән, күпселек башҡорт ғаиләһе бер-ике баланан да артыҡты тәрбиәләмәй. Икенсенән, ата-әсәһе саф башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, балаларына туған телен өйрәтеүҙе кәрәк түгел, тип һанағандар бихисап.**






Айҙың йөрәк яраһын ҡуҙғытҡанына нығ үкенеп, башҡаса һуғыш хаҡында иҫләмәҫкә ҡарар итте Салауат. Осрашҡан саҡтарында әллә ни әһәмиәте булмаған нәмәләр хаҡында һүҙ алып барырға тырышһа ла, ҡыҙ фәлсәфи фекерләүҙәргә төшөп китеп, уларҙан ниндәйҙер мөһим һығымта яһай белеүе менән таң ҡалдыра ине. Күп кенә осраҡтарҙа үҙебеҙ ошо илдә оҙаҡ йылдар буйы йәшәп тә, иғтибар итмәгән ҡиммәттәрҙе Ай бик тиҙ генә күрә һала. Әле бөгөн Салауат ҡыҙҙы үҙе йәшәгән дөйөм ятаҡҡа сәйгә алып ҡайтты. Ыҡсым ғына бүлмәнең стенаһында элеүле торған картаны күреп, ҡыҙ уға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо.

- Ҡара әле, Са-ля-уат, - нишләптер һаман ошо исемде ауыр итеп әйтә ине, - Рәсәй ниндәй ҙур! - Ҡыҙ бармағы менән карталағы Рәсәй сиктәрен йөрөтөп сыҡты.

- Эйе, - тине сәй әҙерләп йөрөгән Салауат күңелле итеп. - От Москвы до самых до окраин, с южных гор - до северных морей...

Был йырҙы ҡайҙандыр элегерәк өйрәнеп алған Ай хатта уны дауам итеп, урыҫ һүҙҙәрен бер ҙә ғына боҙа биреп, йырлап та ебәрҙе:

*Челёвек проходит как хозяин*
*Необъятной Рёдины своей...*

- Әллә ҡасанғы Советтар Союзы осоронда сығарылған был йырҙы ҡайны арала отоп алғанһың һин, Ай? - тине Салауат ғәжәпләнеп.

Алдан килешкәндәй, икәүләшеп ҡулға-ҡул тотоношоп, иҙән уртаһында әйләнеп, шул йырҙың ҡушымтаһын бергә йырлап тамамлап ҡуйҙылар:

*Широка страна моя родная,*
*Много в ней лесов, полей и рек.*
*Я другой такой*
*страны не знаю,*
*Где так вольно дышит*
*человек...*

- Ҡайҙан беләһең һин был йырҙы? - тип ҡабатланы Салауат. - Хәҙер инде уны хатта беҙҙең илдә лә тик өлкән быуын кешеләре генә йырлай!

- Мәктәптә уҡыған саҡта бер уҡытыусы өйрәткәйне. - Ай артабан Евразия картаһына ҡарауын дауам итте. - Минең урыҫ теле менән ҡыҙыҡһынғанымды белгәс, Мәскәү университетына барырға ла ул кәңәш бирҙе.

Шундай алсаҡ ҡыҙҙың балалар һымаҡ шатланғанын, бер туҡтауһыҙ тәтелдәгәнен кинәнеп тыңланы инде стакандарға сәй ҡоя башлаған Салауат.

- Ә бына - Башҡортостан! - Ай Рәсәй картаһының ҡап уртаһында йөрәк формаһын хәтерләткән йәшел төҫтәге илде түңәрәкләп күрһәтте. - Япраҡҡа оҡшап ҡына тора...

Салауат тағы бер шиғырҙы иҫенә төшөрөп, ҡулдарын артистарса йәйеп ебәрә биреп, һөйләп ебәрҙе:

*Ер шарының картаһына*
*Ҡараһаң яҡшы ғына,*
*Башҡортостан шул картала*
*Бер япраҡ саҡлы ғына...*

Башҡортса бер ни аңламауына ҡарамаҫтан, үҙен иғтибар менән тыңлаған мөләйем японкаға ошо шиғырҙы урыҫсаға тәржемә итеп бирҙе.

- Илегеҙ тураһында ҡалай күп шиғырҙар, йырҙар беләһегеҙ, - тип ғәжәпләнде Ай. - Һәр бер осраҡҡа...

- Һәр кемгә үҙ иле, үҙ халҡы ҡәҙерле инде ул, - тип ҡуйҙы егет. - Әйҙә, сәй эсеп алайыҡ, - үҙе лә һиҙмәҫтән тағы ла бер көйҙө көйләп алды.

Грузинский сәй сәйнүктә
Өҫтәлдә башҡорт балы...

- Әйҙә, бына башҡорт балына етеш, - бал һалынған һауытты ҡыҙға яҡыныраҡ шылдырҙы.

- Һин ғәжәпләнмә, Салауат, әммә мин башҡорт балы хаҡында ла ишеткәнем бар. Хатта Рәсәйгә килмәҫ борон уҡ. Бөтә донъяға даны таралған бал бит ул!..

Шулай сөкөрләшеп, күңелле генә итеп сәй эсеп алдылар.

Ҡунаҡ ҡыҙының һәр һорауына ихлас яуап бирергә тырышты егет. Ай тағы карта янына килде.

- Ҡарағыҙ әле, Салауат, - тине тағы Башҡортостанға күрһәтеп, - һеҙҙең илегеҙ Япон утрауҙарына ҡарағанда бик күпкә лә бәләкәй түгел икән. Иң күбендә - ике-өс мәртәбәгә ҡайтышыраҡтыр. Ә кисә мин интернеттан ҡарап, кеше һанын сағыштырып ултырҙым.

- Японлар менән башҡорттарҙымы?

- Эйе, эйе, - тине ҡыҙ. - Беҙҙең япон халҡы утыҙ мәртәбәгә күберәк икән... Һеҙҙең ерегеҙ шундай иркен!

- Башҡорт ере борон-борондан шулай иркен, бай булған шул, - тип ҡуйҙы Салауат. - Бәлки, башҡа халыҡтарҙың был ерҙәргә ҡыҙығыуыуна шул да сәбәп булып торалыр. Әгәр интернеттан Башҡортостанда йәшәгән башҡорт милләтенең сағыштырмаса һанына иғтибар иткән булһағыҙ, унда башҡорттар өҫтән бер өлөш тә тәшкил итмәй...

- Нишләп шулай икән?

- Тарихҡа күҙ һалһаҡ, борон-борондан башҡорт халҡы үҙенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшә килгән. Һәр төрлө ихтилалдарға күтәрелгән. Ә шул восстаниеларҙы аяуһыҙ баҫтырғандан һуң халыҡты меңәрләп ҡырылған осорҙар ҙа булған. Үҙең белгән Салауат батыр бына шул осорҙағы геройҙарҙың береһе инде.

- Ә хәҙерге көндә башҡорттарҙы ҡырған кеше юҡ бит! Нишләп улар ҡабаттан үрсеп китмәй?

- Эйе, хәҙер беҙгә бер кем дә теймәй. Киреһенсә, башҡорттар артһын, үрсеһен өсөн бөтә шарттар булдырылған. Тик хәҙер башҡорттар үҙҙәрен үҙҙәре "ҡыра"...

- Нисек инде - үҙҙәре?.. - зирәк ҡыҙ был юлы егеттең тел төбөн аңламаны.

- Беренсенән, күпселек башҡорт ғаиләһе бер-ике баланан да артыҡты тәрбиәләмәй. Икенсенән, ата-әсәһе саф башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, балаларына туған телен өйрәтеүҙе кәрәк түгел, тип һанағандар бихисап. Үҙ телендә һөйләшә белгән балаларын да урыҫ мәктәптәренә биреп, телен онотторалар. Һөҙөмтәлә, башҡортлоҡ тик паспортта ғына тороп ҡала. Ә киләһе быуын балалары үҙҙәренең ата-бабалары ҡасандыр башҡорт булғанлығын ғына иҫкә алалар. Ғаиләне лә башҡа милләт кешеһе менән төҙөүгә аптырап тормайҙар, уларының балалары, әлбиттә, башҡортлоҡто инҡар итеүсән...

- Уй, ҡалай ҡурҡыныс...

- Эйе. Ярай әле, ауыл ерҙәрендә әлегә тел һаҡланып килә. Тел бар ерҙә милләт тә тере.

- Һеҙ үҙегеҙ ауылданмы?

- Эйе, төпкөл башҡорт ауылынан мин. Милләттәштәребеҙ аҙайыуға тағы бер сәбәп бар.

- ... ?

- Күптәр ситкә китеп оя ҡора. Халҡыбыҙ вәкилдәренең эшһөйәр егет һәм ҡыҙҙары менән Себер тулған. Уларҙың бала-сағаларының күпселеге үҙҙәрен башҡорт итеп тоймай. Телдәре хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Бына шулай, Ай һылыу.

- Айһылыу?.. Ҡалай матур яңғырай! Нимәне аңлата ул "һылыу" тигән һүҙ.

- Красавица, - тип тәржемә итеп бирҙе егет.

Оялышынан бер аҙ йөҙө алһыуланған ҡыҙ һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борорға тырышты:

- Ә һеҙҙең ғаиләлә нисә бала?

- Беҙ - биш малай.

- Биш малай?.. Ҡалай яҡшы! Ә бына минең әсәй яғы нәҫеленән һәр быуында тик берәр генә ҡыҙ... Хәйер, был хаҡта һөйләгәйнем инде. Ҡасандыр бала табырға тура килһә, минең дә улым булмаясаҡ...

- Аллаһ насип иткән булһа, барыһы ла булыр, - тип йыуатты егет тағы кәйефһеҙләнә башлаған ҡыҙҙы.

- Америка бомбаһынан "нурланған" күҙәнәктәр быуындан-быуынға күсеп, шундай сирҙе һаҡлап киләләр шул... Генетиктар фаразлауынса, был ауырыу тағы бер нисә быуында һаҡланыуы мөмкин.

- Әгәр теләгең булһа, мин һине үҙебеҙҙең университеттың генетика һәм радиология кафедраларына алып барып тикшертә алам...

- Әллә инде, берәй файҙа булырмы икән... Беҙҙең Токио университетындағы бер ғалим минә былай тип әйткәйне: "Фәнгә аҙ таныш булған, радиоактив нурҙар арҡаһында барлыҡҡа килгән һанһыҙ сирҙәрҙән был төрөн фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар ғына йөрөтә. Әммә бер ҡасан был ауырыуҙың бөтөүе лә ихтимал. Нәҫелегеҙҙә ҡасандыр малай тыуыуы ошо хаҡта күрһәткес булыр. Тик нисә быуындан һуң булыры билдәһеҙ. Был процесҡа бер нисек тә тәьҫир итеп булмай..." Ә бит шул ҡәһәрле атом бомбаһынан сирлелер тик мин генә түгел, ә меңәрләгән! Өҫтәүенә, тағы дүрт йыл элек булған Фукусима фажиғәһе - Айҙың күҙҙәре тағы йәшләнде.

- Нишләп беҙҙең халыҡҡа шундай ауыр һынауҙар килә икән?..

- Бындай һынауҙарҙан бер халыҡҡа ла гарантия бирелмәгән. Украина илендәге Чернобыль ғәрәсәтендә лә күпме кеше һәләк булып, йәиһә ғәрипләнеп ҡалды. Ошо көнгәсә шул тирәлә йәшәгән, йәиһә эшләгән күптәр һәр төрлө сирҙәрҙән үлгеләй, - тине Салауат ҡыҙға башҡаса ни әйтергә белмәй.

Һүҙҙәрҙең бындай күңелһеҙ йүнәлеш алыуын, әлбиттә, һис тә теләмәгәйне ул. Ҡыҙҙың күңелен нисек асырға? Китап кәштәһендә ятҡан ҡурайҙарға күҙе төштө. Нишләп бая уҡ шул башына инмәгән, ауыҙына май булғыры. Айҙай һылыуҙы картаға ҡаратып ултыртып ҡуйған, егет ишараты... Эстән генә үҙен-үҙе шелтәләп, кәштәлә ятҡан төрлө оҙонлоҡтағы матур-матур ҡурайҙарға үрелде. Быны күргән ҡыҙҙың йөҙө әле генә болот араһынан сыҡҡан ҡояштай, тағы яҡтырып китте.

- Кур-ай, - тине ҡыҙ ҙа башҡорт орнаменты менән биҙәкләнеп яһалған ҡурайҙың береһен ҡулына алып.

- Быныһын да беләһең, - тип йылмайҙы Салауат.

- Беләм, - тине Ай, - ишеткәнем дә бар. Бөтә башҡа музыка ҡоралдарынан айырмалы, ҡурайҙың фәҡәт башҡорт милләтенә генә хас икәнлегенә тиклем минә мәғлүм. Үткәндә концертта ла уйнанылар бит.

Салауат ҡурайҙарҙың береһен алып, тишектәрен сылатып алды ла, ауыҙына ҡуйҙы. Дәртләнеп уйналған "Буранбай" көйөн тыңлаған ҡыҙҙы һағыш баҫҡанын уның ҡабаттан йәшләнгән күҙҙәренән уҡырға була ине. Бер аҙҙан Салауат, ҡурай уйнауынан туҡтап, моңло итеп йырлап ебәрҙе.

*Табаҡ та ғына табаҡ,*
*ай, аҡ ҡағыҙ*
*Буранбайҙың яҙған хаттары.*
*Буранбайҙың яҙған хатын*
*уҡып,*
*Зар илайҙыр ауыл*
*ҡарттары...*

- Бик ҡайғылы йыр буғай, - тине Ай йыр тынғас, ҡулъяулығы менән күҙ йәштәрен киптереп алып, - нимә тураһында ул?

- Батша хөкүмәте тарафынан нахаҡҡа хөкөм ителеп, Себер каторгаһына һөрөлгән Буранбай исемле башҡорт егете хаҡында был боронғо йыр, - тип аңлатты Салауат. Хатта урыҫ теленә йырҙың бер куплетын тәржемә итеп тә бирҙе.

*...Аксакалы плакали читая*
*Лист за листом письма*
*Буранбая.*
*Из суровой каторжной неволи,*
*Из далекого Сибирского края...*

- Моң-зар, һағыш менән тулған, үҙәктәргә үтерлек йыр. Бындай йырҙы ишеткәнем юҡ ине...

Ниҙер иҫләп, Ай кинәт күңелләнеп китте.

- Әй, теге японлар тураһындағы көйҙө уйна әле.

Егет ялындырып тормаҫтан, дәртле генә итеп "Порт Артур"ҙы һыҙҙырып ебәрҙе. Ҡыҙ көй ыңғайына иҙән уртаһына төшөп әйләнгеләп алды.

* * *

Буш ваҡыттарында шулай осраша торҙолар. Ай менән күңелле ине Салауатҡа. Хатта ҡыҙҙың урыҫса һөйләшкәндә ныҡ ҡына беленгән акцентын да оҡшата ул. Үҙ-ара гәпләшә торғас, ниндәйҙер берәй ҡыҙыҡ темаға юлыға улар. Һәр төрлө өлкәлә яҡшы ғына белемле булған был япон ҡыҙы ла Салауаттан үҙе өсөн ифрат та әһәмиәтле булған мәғлүмәт ала. Әле бөгөн осрашҡас та ҡыҙ күптән уйлап йөрөгән үтенесен әйтте.

- Мосолман мәсетенә бер ҡасан да инеп ҡарағаным булманы. Шул үҙегеҙҙең ғибәҙәтханағыҙға алып барып күрһәтмәҫһеңме? - тине Ай. - Әллә япон ҡыҙы булғас, миңә унда инергә рөхсәт итмәҫтәрме икән?

- Нишләп рөхсәт итмәһендәр, ти? Мәсет тик башҡорттар өсөн генә түгел бит... Башҡа учреждениеларҙан айырмалы, мәсет ишеге һәр саҡ һәм һәр кеше өсөн асыҡ. Әлбиттә, алып барып күрһәтәсәкмен. Теләһәң - хәҙер үк!

- Әйҙә, улай булғас, - тине Ай шатланып.

Мәсет ишеге алдында уларҙы һаҡаллы оло ғына бер ағай ҡаршы алды. Мәсет буйынса дежурҙағы кеше икән.

**(Дауамы бар).**

✓ Бабич ижадына етергә теләүсе йәштәр күп, тик барыһы ла булдыра алған эш түгел, елкә йоҡа, бил тотмай. Заман да хәҙер башҡа. Шуныһы ҡыҙыҡ, Бабичтың кем икәнен белмәгән лауреаттарҙы ла күрҙе беҙҙең ил.





**"Тамыр" балалар телеканалының тапшырыуҙарын яратып ҡараған балалар "Бауырһаҡ апай" тип белгән оҫта хужабикә, тәмле-татлы ризыҡтар бешерергә өйрәтеүсе Ләйсән Мәзитова кескәйҙәр өсөн ижад итеүҙән тыш, етди документаль фильмдар ҙа төшөрә. Быйыл уның "Һуҡмаҡһыҙ юлсы" тип аталған документаль фильмын тамашасылар бик йылы ҡабул итте, ә "Герой-балалар" проекты Рәсәй кимәлендә "ТЭФИ - Регион 2014" бәйгеһендә иң яҡшы фильм тип табылған. Әле уның был эштәре Ш. Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премияһына тәҡдим ителгән. "Ижадхана"ға саҡырылған ҡунағыбыҙ менән тележурналист һөнәре, балалар һәм документаль фильмдар тураһында һөйләштек.**

# БУРЫСТАРЫМ БАР...

## уларҙы тормошҡа ашырыу юлындамын



### Журналист илһам көтөп ултырмай...

Тележурналист булыу теләге 10 класта уҡығанда тыуҙы, буғай. Ҡыҙыу нөктәләрҙә эшләүсе хәбәрсе булғым килә ине. Башыма каска, түшемә бронежилет кейеп, пулялар аҫтында стенд-ап һөйләргә хыялланғанымды иҫләйем. Әлдә әле был хыял тормошҡа ашмаған. Әммә балалар менән эшләүҙе лә мин үҙенсәлекле бер алыш, бәйге менән сағыштырыр инем.

Мәктәпте тамамлаған саҡта, уҡырға ҡайҙа барырға, тигән һорау менән оҙаҡ баш ватманым, туп-тура Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына документтарымды тапшырҙым. Мәктәптә миҙалға тамамлағас, телевидениенан рекомендация, характеристика булғас, мине бер һүҙһеҙ уҡырға алдылар. Әммә баяғы шул "халыҡ артисе" булыу теләге тынғы бирмәгәндер инде, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының вокал бүлегенә лә уҡырға инергә уйланым. Имтиханда башҡорт халыҡ йыры "Бейеш"те йырланым, шулайтып уҡырға индем. Ҡунаҡ килгән һайын ата-әсәйемден: "Беҙҙең ҡыҙ ике уҡыу йортонда белем ала", - тип маҡтаныуҙары ошо ике вуҙҙа уҡыуҙың ауырлыҡтарын үтеп сығырға көс бирҙе, тип шаяртам хәҙер.

Тележурналист һөнәрен мин һайламаным, һөнәр үҙе мине һайланы. Эшләгән һәр яҙмам, нисектер, ҡыҙыҡ килеп сыға, үҙемә оҡшай ине. "Артылыш"ҡа яҙмалар эшләргә Рәзилә Салауатова өйрәтте. Радио тапшырыуҙарҙа Ләйсән Усманова, тура эфирҙа Резеда Миндиярова сыныҡтырҙы, "Тамыр" балалар телеканалының директоры Гөлназ Ҡолһарина иһә, минең ошо юлда тайпылмай атлауыма булышлыҡ итә. Үҙ тамашасым, ә иң мөһиме, ҡәҙерле эфир минуттары булыуға яҙмышыма рәхмәтлемен.

Балалар менән уртаҡ тел табыу минә гел еңел бирелә, тип әйтмәҫ инем. Бәләкәй балалар менән эшләргә тынысһыҙым, түҙемлегем етмәй. Шуға күрә, "Сәнгелдәк" тапшырыуын төшөр, тип әйтһәләр, ризалашмаҫ инем. Мин үҫмерҙәр менән яҡшы бәйләнеш булдырам. Тапшырыуҙарҙың алып барыусылары булып эшләгән үҫмерҙәр менән "бер телдә" һөйләшәм, уларҙы башҡортса аралаштырыу өсөн заманса "текә" һүҙҙәрҙе үҙебеҙсә тәржемә итеп ебәрәм. Мәҫәлән, "не парься" тигән һүҙҙе "сабынма" тип тәржемә итеп алдыҡ, "обалденный, супер, крутой" тигәндәрҙе "хәтәрский" тип һөйләйбеҙ. Балалар менән съемка мәленән тыш та аралашабыҙ. Күбеһе КВН-да ҡатнаша, үҙҙәрен төрлө сараларҙың алып барыусылары булараҡ күрһәтә. Улар менән эшләү үҙе бәхет. Бер көн Айсулпан исемле ҡыҙ минән һорай: "Ләйсән апай, ә һеҙ мине яратаһығыҙмы?" - ти. Мин әйтәм: "Нинә улай тип һорайһың, яратмайым кеүек тойоламы әллә?" Ул: "Юҡ, былай ғына, мин һеҙҙе ныҡ яратам", - ти. Сулпиктың шул һүҙҙәре гел ҡолағымда сыңлай. Шул балаларҙың мөхәббәтенә, ихтирамына тәрәнөп йәшәйем, улар өсөн мин дуҫ, яҡын кеше.

Журналист - ул илһам килгәнен көтөп ултырыусылар һөнәре түгел. Әгәр минең эфирға сығырға илһамым юҡ икән, тимәк, минең гүмерем заяға үтә. Шуға ла мин һәр саҡ күтәренке кәйефтә йөрөргә тырышам. Борсолорға урын юҡ бит: Аллаға шөкөр, бөтә ағзаларым теүәл, ата-әсәйем бар, ағайҙарым, ҡәйнәм менән ҡайным, минең өсөн өҙөлөп тороусы ирем, дуҫтарым, тамашасым бар. Бурыстарым да бар. Уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн илһам ғына түгел, ә оло көс сарыф итеү кәрәк.

### Документаль фильмға тотоноуым

Документалистика - бик ҡатмарлы жанр. Ул теүәл һандарҙы, факттарҙы ярата. Был юҫыҡтағы эштә бер генә мәғлүмәтте лә иҫтән сығарып төшөрөп ҡалдырырға, әһәмиәт бирмәй урап үтергә ярамай. Юғиһә, һин алдаҡсы булып сығаһың. Ә журналист өсөн "алдаҡсы" тигән ямананы таралыуҙан да ҡурҡыныс нәмә юҡ. Тәүге тапҡыр Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә бәйле "Донъяның яҙҙары икәү" документаль фильмы өҫтөндә эшләнем. Был фильм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында уҡыған осорҙа "Оҙон-оҙаҡ баласа" әҫәре буйынса үҙебеҙ сәхнәләштергән спектаклгә арналды. Ижади эҙләнеүҙәр ваҡытында Мостай Кәрим әҫәрҙәренең геройҙары тураһында һөйләгән бик күп видеояҙмаларҙы телевидение архивында таптым. Үҙемдең һәр нәмәнең айышына төшөнә, ентекләп өйрәнә, төпсөнеп белә, эште еренә еткереп башҡара торған кеше булыуымды ошо проекты тормошҡа ашырғандан һуң аңланым. Беренсе нөктәһенә тиклем эшләнә, мин "микшерына тиклем" бөтәһен дә ентекләп үтәйем. Шуға күрә, артабан да документаль фильмдар йүнәлешендә яңы проекттарға ҡурҡмайынса тотондом.

"Герой-балалар" проектын үҙемдең төп эшем - "Тау-тау хәбәр" һәм "Бауырһаҡ" тапшырыуҙарын төшөрөүҙән тыш, өҫтәмә рәүештә эшләнем. "Нисек өлгөрҙөң?" тип һорағалар, хәҙер үҙем дә аптырап ҡуям. Сөнки Башҡортостанды тағы бер ҡат арҡырыһынан буйына үтергә тура килде. Минең геройҙарым - республикабыҙҙың аҫыл балалары, ышаныслы киләсәге. Редакциябыҙға 60 кешенән торған исемлек килгәйне, шулар араһынан мин 18 йәшкә тиклемгеләрҙе һайлап алдым. Утыҙ баланың егерме бере менән күрешергә, танышырға насип булды.

Баланы икенсе бала менән сағыштырып, һин былай, ул тегеләй, тип ҡарарға ярамай. Ата-әсәйем беҙ бишәү булһаҡ та бер ҡасан да бер-беребеҙ менән, класташтар, дуҫтар менән сағыштырманы. Минеңсә, кешене сәмләндерәм тип уйлап, башҡалар менән сағыштырыу ҡайсаҡ көнләшеү тойғоһон үҫтерә. Һәр кемдең донъяға үҙ ҡарашы, үҙ яҙмышы. Геройҙарым араһында тик бер генә уртаҡлыҡ бар: улар барыһы ла "битарафлыҡ" тигән нәмәне белмәй. Мәҫәлән, Арсен Байғусҡаров исемле Хәйбулла егете һыуға батып барған өс ҡыҙҙы тартып сығарған! Өс ғаиләне бәхетле иткән егет. ДЦП менән сирләүсе Салауат ҡалаһы егете Андрей Новиков һау балаларҙан бер ҙә айырылмай. Ә Аҫҡын районынан Эльза Юлдашева тигән ҡыҙ ағаһын бер үҙе ҡар аҫтынан соҡоп сығарған. Был да оло батырлыҡ бит! Хәлемдән килһә, шундай балаларҙы төшөрөр инем дә, төрлө предприятие, ойошмаларҙа опертивка ваҡытында күрһәтер инем. Ҡайһы бер өлкәндәр балаларҙан үрнәк алһа, ҡалай шәп булыр ине. Тырыш, егәрле, батыр, аҡыллы, ә иң мөһиме, ихлас балалар бит улар. Был проекты эшләгәндә үҙемде һуғыш яланында йөрөгән кеүек хис иттем. Ҡайһы бер балаларҙың батырлығын күтәрә алмаған абзый-апайҙар менән һүҙ көрәштереп, телем талды. Әммә бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп, проект барыбер эфирға сыҡты. Ул ғына ла түгел, Рәсәй кимәлендә иң шәп документаль фильм тип табылды.

"Һуҡмаҡһыҙ юлсы"ға килгәндә, быға ике йыл инде мин Дим ағайҙың йырҙары менән йәшәйем, ул минең маяғым. Бер тамашасы: "Ул һинең туғаныңмы әллә?" - тип һораны. Юҡ, мин уның фанаты ғына. Заманында, йырлағым килгән саҡта, ул минә ярҙам ҡул һуҙҙы. Эстрадаға ишек асты, тип әйтмәйем, әммә асҡысын тапшырҙы. Фильм өҫтөндә эш бер йыл самаһы барҙы. Дим ағайҙың улы Данил менән танышҡас, был эшкә төптән тотонорға булдым. Архив материалдарын төндә монтаж бүлмәһендә яңғыҙ ултырып ҡалып, илай-илай ҡараным. Һунынан съемкалар барышында Дим ағайҙың әсәһе менән танышып, ғаиләһе менән аралашып, балалары менән уртаҡ тел таба алыуыма шатланам. Әле булһа аралашабыҙ. Фильм төшөргәндә оло презентация эшләрмен тип хыялланып йөрөнөм. Дим ағайҙың йырҙарын барыһы ла белә, һәләтле йәштәр бер тин аҡса һорамай концерт ойошторорға ярҙам итте. Дөрөҫөн әйтәм, билет һатылған аҡсаны беҙ зал өсөн ҡуртым хаҡын түләүгә, баҫма материалдар һәм Учалыға презентацияға барып ҡайтыуға тотондоҡ. Фильмды төшөрөүсе операторым Марат Юнысовҡа, ҡораусы Дамир Сәлимовҡа, компьютер графикаһы оҫтаһы Азат Шәриповҡа ныҡ рәхмәтлемен. Телевидениела тапшырыуҙар бер кеше ҡулы менән генә эшләнмәгәне билдәле. Шуға һәр коллегама, ярҙам иткән дуҫтарыма рәхмәт.

### Бөйөк шәхес тураһында

Шәйехзада Бабич башҡорт милләтенең киләсәге өсөн көрәшеүсе, тип кенә әйтеү аҙ. Минең өсөн Бабич - оло шәхес. Бик ихлас, алсаҡ күңелле кеше ине, тип яҙалар китаптарҙа. 24 йәшлек кенә сағында оло ағайҙарҙың йәнен көйҙөрөрлөк булғас, ябай ғына ауыл малайы булмағандыр инде ул. Халыҡ уның исемен тарих төпкөлөндә онотоп ҡалдырмай, беҙҙең заманға тиклем алып килеп еткергән икән, тимәк, ул - шәхес. Тарих бит иң-индәрҙе генә хәтерләй. Уйлап ҡараһаң, заманында Бабич фамилияһын йөрөткәндәрҙе атҡандар. Күптәр фамилияһын үҙгәрткән, әммә тоҡом һаҡланып ҡалған. Бабич ижадына етергә теләүсе йәштәр күп, тик барыһы ла булдыра алған эш түгел, елкә йоҡа, бил тотмай. Заман да хәҙер башҡа. Шуныһы ҡыҙыҡ, Бабичтың кем икәнен белмәгән лауреаттарҙы ла күрҙе беҙҙең ил. Уның исеменә тап төшөрмәй премия йөрөтөүселәр ҙә бар, Аллаға шөкөр. Минең өсөн был премия республикамда тәүге һынау. Шуғалыр ҙа бик ҡатмарлы юлда торам әле. Ш. Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премияһына үҙем теләп сыҡманым, минә ышанысын бағлап, етәксем Гөлназ Фәрит ҡыҙы Ҡолһарина тәҡдим итте. Йәшермәйем, был исемгә лайыҡ булғым килә. Ул илем өсөн хеҙмәт итеүемде дауам итергә этәргес көс булыр ине. Ошо оло шәхестең исеме минең алдымда яңы ишектәр асыр, яңы проекттарҙы бойомға ашырырға ярҙам итер ине. Шайтан ғына өмөтһеҙ, тиҙәр бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ваҡиғалар уртаһында ҡайнап йәшәгән, тәбиғәте менән тынғыһыҙ, һәр ерҙә мөғжизә, быға тиклем кеше күҙенә күренмәгән, ҡолағына салынмаған иҫ киткес яңылыҡ эҙләп йөрөгән кешеләр генә журналист булып эшләргә тейештер. Шулай уҡ ысын журналист - ул иленең, милләтенең патриоты ла. Балалар тәрбиәһенә ҙур йоғонто яһаған матур тапшырыуҙар эшләүсе, шәхестәр тураһында фильмдар төшөрөүсе Ләйсән Сәлих ҡыҙы ла бына шундай журналист булырға ынтыла. Ынтылышы, тырышлығының емештәре лә бар. Ана шул ижад емештәре йәмәғәтселек тарафынан ғына түгел, ә Хөкүмәт тарафынан да баһалана ине, тип теләйбеҙ.**

Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.

КИТАБЕННАС



# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### "Үҙ-үҙеңде танып белеү тураһында аңлат", тип үтенгән бер ир...

"Һеҙҙең күңелегеҙ күпте белә, ләкин төндөң һәм көндөң серҙәре тураһында ауыҙ асып өндәшмәй генә, - тигән Бәйғәмбәр. - Ләкин ҡолаҡтарығыҙ йөрәк серен ишеткеһе килә. Уйығыҙҙа күптән белгәнде һүҙҙәр аша ишетергегеҙ. Тик аң-белем тәрәнлеген үлсәп маташмағыҙ. Сөнки "Мин" - үлсәп булмай торған сикһеҙ океан. "Мин хәҡиҡәтте таптым", тимәгеҙ, "бер бөртөгөн таптым", тигеҙ. "Рух юлын таптым", тимәгеҙ, "минең юлдан барған рухты таптым", тигеҙ. Сөнки рух бөтөн юлдар буйлап бара һәм ҡамыш кеүек тура үҫмәй. Лотос сәскәһеләй, таждарын бер-бер артлы аса һәм ул таждарҙың иҫәбе-һаны юҡ".

### "Беҙгә дуҫлыҡ тураһында һөйлә", тигән бер үҫмер

"Дуҫ - мохтажлығығыҙҙы ҡәнәғәтләндереүсе, - тигән Бәйғәмбәр. - Ул - һөйөү сәсеп, рәхмәт урған баҫыу. Һеҙ уға тынлыҡ эҙләп киләһегеҙ. Дуҫығыҙ серен асҡанда, "юҡ"ты эстән генә әйтегеҙ, "эйе"не әйтеүҙән бер ваҡытта ла баш тартмағыҙ. Дуҫығыҙ шымып ҡалғанда ла йөрәгегеҙ уны тыңлауҙан туҡтамаһын. Сөнки дуҫлыҡ булғанда бөтөн уйниәттәр, өмөттәр шатлыҡҡа солғанып тыуа һәм һүҙһеҙ ҙә аңлашыла. Дуҫығыҙ менән айырылышыуға ҡайғырмағыҙ, сөнки, тау йыраҡтан яҡшыраҡ күренгән кеүек, дуҫтың сифаттары ла ситтән тулыраҡ күренә. Башҡа кешеләрҙән маҡсаты дуҫлыҡ кәртәһен емермәһен өсөн рух ныҡлығына ышыҡланығыҙ. Үҙ мәнфәғәтегеҙҙе генә ҡайғыртыу - дуҫлыҡҡа аяҡ салыу. Күңелегеҙҙең иң яҡты яҡтары дуҫығыҙ өсөн булһын, ул һеҙҙең кире сифаттарығыҙҙы ла белһен. Сөнки дуҫты һеҙ ваҡыт үткәрер өсөн генә эҙләмәйһегеҙ бит. Һуңғы һулышығыҙға тиклем дуҫтар эҙләгеҙ, сөнки улар күңелдәге бушлыҡты тултырыу өсөн түгел, ә мохтажлыҡты ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәк. Дуҫлыҡтың бөтөн йәм-тәме - ҡыуаныс-шатлыҡты уртаҡ бүлешеүҙә".

### "Беҙгә дин тураһында һөйлә", тигән бер оло кеше

"Мин һеҙгә диндән башҡа нимә тураһында һөйләйем һуң? - тигән Бәйғәмбәр. - Дин һеҙҙең бөтөн эшмәкәрлегегеҙҙең сағылышы түгелме ни? Таш тумырғанда йә туҡыу станогы артында эшләгәндә күңелегеҙҙән яҡты нур булып урғылған һоҡланыу-шатланыуығыҙ диндең сағылышы түгелме ни? Иман менән эшмәкәрлек, ышаныс менән шөғөл бер бөтөн. Һеҙҙең кемегеҙ "Быныһы Хоҙайҙыҡы, быныһы үҙемдеке, быныһы тәнем, быныһы күңел өсөн", тип, ваҡытты өлөштәргә бүлә ала? Һеҙгә бирелгән йәшәү ваҡыты, ҡанаттар кеүек, һеҙҙе үҙегеҙҙән үҙегеҙгә илтә. Догматик ҡағиҙәләрҙе байрам күлдәге кеүек кейеп йөрөүселәрҙең шәрә булыуы хәйер. Сөнки яҡтылыҡ ундайҙарҙың тәненә үтеп инә алмай. Тормошон ҡағиҙәләр ҡоршауына бикләгәндәр һайрар ҡошто ситлеккә тотоусыға тиң. Иң азат йыр ситлек аша килмәй, сәнскеле тимер аша ла иреккә сыҡмай. Доға ҡылыуҙы асмалы тәҙрә аша кәрәк ваҡытта ғына асып ҡарау менән бутағандар, ишектәре һәр саҡ асыҡ булһа ла, үҙ күңеленең өйөнә инмәгән әле. Һеҙҙең көндәлек тормошоғоҙ үҙе дин һәм ҡорам - бер бөтөн. Шуға күрә бүлгеләнмәгеҙ. Доға ҡылғанда Хоҙайҙы танығанһығыҙ, ул һеҙҙең һорауҙарығыҙға яуап бирер, хаталарығыҙҙы төҙәтер тип көтмәгеҙ. Тирә-яғығыҙға ҡарағыҙ һәм Уның балаларығыҙ менән уйнап йөрөгәнен күрерһегеҙ".

ХӘТЕРКИТАП

# АҒАЙЫМ ХАҠЫНДА ҺҮҘ







*Ике фотоһүрәттә лә - Мәһәҙей Ҡужәхмәтов, Ҡасим Йәнһүҙин, Әсләм Йәнбирҙин.*

**Минең ете ағайым булып, бөгөнгө көндә уларҙың өсәүһе иҫән. Аллаға шөкөр, дингә таянып, матур итеп донъя көтәләр. Был яҙмамда иң өлкән ағайым Ҡасим тураһында бәйән итмәксемен. Уға 84 йәш. Малай сағында һуғыш ауырлыҡтарын үҙ иңендә үткәргән ағайым бөгөн иҫән-һау йәшәп ята.**

Ағайым 1938 йылда ете йәшендә Үтәгән мәктәбенә беренсе класҡа уҡырға бара. Ете йыллыҡ мәктәп Ҡаҙмаш ауылында була. Тормош ауыр, өҫ-башҡа кейер кейем юҡ, ара ла бик алыҫ. Мәктәпкә көҙ көнө генә йөрөй ҙә, ҡыш булғас, уҡыуын ҡалдырырға тура килә. Буранғолда яңы мәктәп 1940-1941 уҡыу йылында ете йыллыҡ булып асыла. Ағайым артабан шунда уҡый. Артабан уҡырға тура килмәй. Уҡымағас, колхоз ағайымды Әүжәнгә ағас ҡырҡыу эшенә ебәрә. Бер көндө ялға ҡайтһа, Асҡарға килеп етергә тигән саҡырыу ҡағыҙы килгән. Ҡорҙашы Әсләм ағайҙы ла саҡырғандар. Уларҙы һәм Амангилденән Мәһәҙей Ҡужәхмәтовты Белорет ҡалаһына ФЗО-ға уҡырға ебәрәләр. Утыҙ малайҙы столярҙар төркөмөнә берләштерәләр ҙә, иртәгәһенә һауыт-һаба, азыҡ-түлек йөкмәтеп, тағы ла утын ҡырҡырға алып китәләр. Йәш кенә малай-шалай урманда ҡолас етмәслек йыуан ҡарағайҙарҙы йығалар. Берәр метрҙан турап, утынға ярып, эт бәләһе менән штабелгә һалалар.

Ҡалаға ФЗО-ға ҡайтыуға уҡырға килгәндәр менән бараҡтар тулған, ашхана эшләй башлаған була. Уларҙы уҡыу йортоноң цехында ултырғыстар, тумбочкалар яһарға өйрәтәләр. Бер саҡ Мәһәҙей ҙә, Әсләм дә ҡасып ҡайтырға йыйына. Ағайым ҡайтырға бик теләмәһә лә, иптәштәренә эйәрә. Ҡасып ҡайтыуҙарын барыһынан да йәшерәләр. Колхозда эшләйҙәр. Бер аҙҙан, дезертир булып йөрөп булмаҫ, тип, Әсләм ағай менән ҡәнәшләшеп, хәрби комиссариатҡа баралар. Асҡарҙа уларҙы яңынан иҫәпкә ҡуялар. Саҡырыу көтөгөҙ, тип ҡайтаралар.

Атайым ағайымдың ризалығын да һорап тормай, уға күрше Ишкилде ауылынан кәләш әйттерә. Шулай итеп, ағайым менән еңгәм татыу ғаилә булып, 58 йыл бергә йәшәне. Ауылдағы иң матур йорттарҙың береһе лә уларҙыҡы булды. Алты бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Бөгөнгө көндә уларҙың барыһы ла үҙаллы донъя көтә.

Һүҙ аҙағында ағайымдың иптәштәренең артабанғы яҙмыштары тураһында яҙып үтәйем. Улар һаман да яҡын аралашып, дуҫ булып йәшәй. Әсләм ағай Үтәгән ауылы мәсетенең имамы. Ҡасим ағай мәсеттең мәзине. Мәсетте лә үҙҙәре йүнләп йөрөп, халыҡты ойошторop төҙөнәләр. Мәһәҙей ағай Амангилде мәсетендә имам булып тора. Өс дуҫ, ҡайҙа ғына эшләһәләр ҙә, тырыш хеҙмәт итте. Күмәк балалар үҫтерҙеләр. Бөгөн иһә диндар бабайҙар булып хөрмәт ҡаҙанып йәшәйҙәр. Хоҙай һаулыҡ, именлек бирһен уларға!

**Фатима ҺИБӘТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Рысҡужа ауылы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Сәләмәт, бәхетле һәм бай булыу өсөн көс һалығыҙ!

Кешеләр менән эшләп, уларға уңышлы, бай һәм бәхетле булырға ярҙам итеп, мин бер дөйөм фекергә килдем: кеше үҙенә уңышлы булыр өсөн ҡурҡыу хисе ҡамасаулыҡ итә, тип уйлай, ғәмәлдә иһә, уларҙы уңышлы булыуҙан ҡурҡыу туҡтата. Улар, әгәр беҙ уңышлы булһаҡ, ата-әсәләребеҙ, дуҫтарыбыҙ менән мөнәсәбәттәребеҙ боҙолор; бай булып, ожмахҡа эләгә алмабыҙ, тип ҡурҡа. Байлыҡ тағы ла күберәк проблемалар килтерер, тип уйлап, үҙ-үҙҙәренә ышанмаусанлыҡтан яфа сигә, йәнәһе лә, уңыш уларҙы иғтибарһыҙ, насар ата-әсәгә әйләндерәсәк.

Ғәмәлдә, кеше еңелеүҙән ҡурҡмай, уларҙы уңышлы булыу мөмкинлеге туҡтата, шуға күрә төпкө андары менән үҙҙәренең уңышын булдырмаҫҡа тырышалар. Уңыштан ҡурҡыу - түбән үҙбаһаның бер һөҙөмтәһе һәм күпселеккә хас булған инаныу менән зарарланыуҙың, программаланыуҙың туранан-тура һөҙөмтәһе. Күпселекте нимә тураһында, нисек уйларға өйрәтәләр һәм улар хатта үҙҙәре уйларға ла белмәй. Өйөр фекерләүе ысулынан ҡотолоу өсөн бөтөн нәмәлә шикләнеп, үткер һәм башҡаларҙан айырмалы фекергә эйә булырға кәрәк.

Күпселек ни өсөн өмөтһөҙлөктә йәшәй: улар игенде кәбәктән айыра алмай. Билл Гейтс ни өсөн миллионерға әйләнгән, сөнки ул башҡалар күрмәгәнде күрә белгән; бөтөн нәмәгә шик белдереп: "Әгәр...", "Ни өсөн?", "Ни өсөн юҡ?" - тигән һорауҙар биргән. Ул мәғәнәһе булған өсөн эшләнгән эш менән "барыһы ла шулай эшләй" араһында айырманы күрә белгән.

Билл Гейтс - Генри Форд, Дж. Пол Гетти, Эндрю Карнеги, Леонардо да Винчи, Гульельмо Маркони, Томас Эдисон, Альберт Эйнштейн, Эйн Рэнд һәм башҡа бик күп тарихҡа билдәле булмаған икенсе төрлө уйлаған, әммә исемдәрен беҙ бер ваҡытта ла белмәйәсәк аҡыл эйәләре кеүек үк икенсе төрлө уйлаған.

Спортта, бизнеста һәм, ғөмүмән, тормошта юғары ҡаҙаныштар һәләттән, әҙерлектән, оҫталыҡтан түгел, ә кешенең ошо ҡаҙаныште тормошҡа ашырыусы аңынан да тора. Был уңыш бик йыш өйөр фекерләүенән айырыла һәм инаныуҙарығыҙҙы шик аҫтына ҡуйырға тейеш. Әгәр инаныуҙарығыҙҙы шик аҫтына ҡуйһағыҙ, үҙегеҙҙе сикләүегеҙҙе аңлаясаҡһығыҙ. Әгәр инаныуҙарығыҙ именлегегеҙгә, уңышлығыҙға хеҙмәт итә икән, улар быңдай һынауҙы үтәсәк; кире осраҡта һеҙ уларҙы үҙегеҙҙең файҙаға эшләүсе инаныстар менән алмаштыра алаһығыҙ. Мәҫәлән, юғары белемгә эйә булмай тороп уңыш ҡаҙаныу ауыр; аҡса эшләү өсөн аҡса кәрәк; беҙҙең бәләкәй ҡалала бизнес башлау еңел түгел; беҙҙең милләт кешеһенә ниҙмәгәр өлгәшеү еңел түгеллегенә инанаһығыҙ.

**Ә бына бер нисә альтернатив инаныу:**

- Билл Гейтс менән Пол Аллен юғары белемһеҙ ҙә уңышҡа өлгәшкән, тимәк, мин дә булдыра алам.
- Аҡса эшләү өсөн бары тик яҡшы идея ғына кәрәк.
- Минең ҡалала йәшәүсе кешеләр уңышлы була алған икән, тимәк, мин дә быға өлгәшә алам.
- Минең милләттәштәремдең күбеһе уңышлы икән, минә үҙемдән башҡа берәү ҙә ҡамасаулыҡ итә алмаясаҡ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 7 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Путешествия Гулливера". Худ. фильм (12+).
02.00, 03.05 "Лучший в мире любовник". Худ. фильм.
03.00 Новости.
03.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Истинные ценности". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 1-3 серии. Детективный сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Здравствуйте, я ваша тетя!" Комедия.
02.55 "Охраняемые лица". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Тулпар" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд Башкирского ТВ" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Биш дауа" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (0+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Солдат Джейн". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 8 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Лучше не бывает". Сериал (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". 3-я и 4-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25, 03.05 "Место под соснами". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Соглядатай". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Операция "Доктор". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 4-6 серии (12+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
02.30 "Охраняемые лица". Сериал (16+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостец" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 17.45 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Шәп арба" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Биш дауа" (12+).**
**18.55, 01.15 Хоккей. ВХЛ. Кубок Открытия. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (0+).**
**23.00 "Гранатовый браслет". Худ. фильм (6+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 9 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Лучше не бывает". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". 5-я и 6-я серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30, 03.05 "Мой путь". Биографическая драма (16+).
03.00 Новости.
03.25 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Работа над ошибками". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 7-я и 8-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Соломенная шляпка". Мюзикл. 1-я серия.
02.00 "Охраняемые лица". Сериал (16+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 20.15 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**21.20, 02.45 Хоккей. КХЛ. ЦСКА (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**00.30 "Однажды в Голливуде". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 10 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Лучше не бывает". Сериал (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". 7-8-я серии. Сериал (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Дружинники" (16+).
02.20, 03.05 "Перси Джексон и похититель молний" (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Поедем, красотка, кататься". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 9-10-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Соломенная шляпка".
02.00 "Охраняемые лица" (16+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (0+).**
**17.15 "История признания" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Историческая среда" (12+).**
**18.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.45, 01.15 Хоккей. ВХЛ. Кубок Открытия. "Торос" (Нефтекамск) - "Кристалл" (Саратов).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Одиноким предоставляется общежитие". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 11 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.25 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Лучше не бывает". Мелодраматический сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.50 "Вечерний Ургант".
00.45 "Мадемуазель Си". Док. фильм (16+).
02.30 "Семейная свадьба". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "История болезни". Сериал (16+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Кривое зеркало" (16+).
00.20 "Роман в письмах". Мелодрама (12+).
02.20 "Горячая десятка" (12+).
03.25 "Шум земли".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 24.00 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Байтус" (6+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (0+).**
**21.00 "Легенды спорта" (12+).**
**21.20, 02.50 Хоккей. КХЛ. "Северсталь" (Череповец) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**00.30 "Счастливое число Слевина" (16+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 12 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 06.15 "Россия от края до края". "Сибирь" (12+).
06.00 Новости.
06.35 "Лист ожидания". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Станислав Любшин. Сентиментальный роман" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Надежда Румянцева. Одна из девчат".
14.10 "Королева бензоколонки" (6+).
15.40 "Голос" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "ДОстояние РЕспублики".
21.00 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.55 "Мы купили зоопарк". Комедия (12+).
01.15 "Операция "Арго" (16+).
03.25 "Морской пехотинец-2" (18+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.05 "Дамы приглашают кавалеров". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.20 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Военная программа" Александра Сладкова.
09.05 "Танковый биатлон".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Моя жизнь сделана в России".
12.00 "Счастье есть". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Счастье есть". Продолжение сериала (16+).
16.30 "Субботний вечер".
18.00 "Синдром недосказанности". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Мелодия на два голоса". 4 серии. Детективный сериал (12+).
00.35 "Не покидай меня, любовь". Худ. фильм (12+).
02.40 "Волшебная сила". Худ. фильм (16+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05, 12.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Астерикс: Земля Богов" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**17.00 "Ах, Сапатера! Чудесная башмачница" (12+).**
**19.00 "Замандаш" (6+).**
**18.55 Волейбол. Кубок Победы. "Динамо" (Краснодар) - "Урал" (Уфа).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Строитель" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "План Б" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Последнее море Чингисхана" (12+).**

## 13 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Лист ожидания". Сериал (16+).
08.10 "Армейский магазин"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.15 "Неподсуден".
15.00 "Каникулы строгого режима". Комедия (12+).
17.10 "Время покажет" (16+).
19.00 "Клуб веселых и находчивых" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников-2015. Продолжение (16+).
23.45 "Большой брат следит за тобой". Док. фильм (16+).
00.55 "Тихий дом" на Венецианском кинофестивале.
01.25 "21 грамм". Триллер (16+).
03.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.15 "Возврата нет". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается".
13.10 "Мой любимый гений". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Мой любимый гений". Продолжение сериала (16+).
17.30 "Главная сцена".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Выкрутасы". Комедия (12+).
02.35 "Зоя Воскресенская. Мадам "совершенно секретно" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Алиса знает, что делать!" (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "Медовая страна" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.30 "Млечный путь" (12+).**
**16.15 "Дорога к храму" (6+).**
**16.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**17.45 "История признания" (12+).**
**18.00 "Мир настоящих мужчин" (6+).**
**18.15 "Любимое дело" (12+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (0+).**
**22.30 "Байыҡ-2015" (0+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Амели" (12+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ГЕОЛОГТАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**32-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса: Шәрипов.** Джонг. Ундевит. Әҫәр. Арахис. Ирәмәл. Икар. Зыя. Әрәмә. Имшеү. Андыҙ. Клевер. **Садиҡова. Йәнтүрин.** Аҙна. Райт. Ләлә. Үләң. Әшнә. Нюша.

**Вертикаль буйынса: Ишбирҙин.** Әмәл. Шығай. Үлсән. Уралым. Тәлгәш. Анд. Рододендрон. Ирәүән. Вәғәз. Онна. Вегетация. Каротинға. Раевка. Хөрмә. Сәриә. Роза.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (23) дүшәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:22 | 19:52 | 21:22 |
| 8 (24) шишәмбе | 5:06 | 6:36 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 9 (25) шаршамбы | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |
| 10 (26) кесе йома | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |
| 11 (27) йома | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 12 (28) шәмбе | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:09 | 19:39 | 21:09 |
| 13 (29) йәкшәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:07 | 19:37 | 21:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

## ЕҢӘЛӘР, ЕҢЕЛӘЛӘР...

Быйылғы уйын миҙгелендә юлаевсылар үҙ боҙонда беренсе тапҡыр "Югра" хоккей командаһын ҡабул итте. Өйҙәге тәүге матч өфөләр өсөн уңышлы булды: иҫәп хужалар файҙаһына - 4:2. Беренсе осорҙа уҡ "Салауат Юлаев" ҡунаҡтар ҡапҡаһына 3 шайба индерҙе, ә икенсе осорҙа иҫәпте тағы ла берәүгә арттырҙы. "Югра"лар иһә 2 шайба менән генә яуап бирә алды. Юлаевсылар Андреас Энгквист, Егор Дубровский үҙ иҫәптәренә - берәр, ә команда капитаны Игорь Григоренко икешәр мәрәй яҙҙы.

1 сентябрь "Өфө-Арена"ла юлаевсылар менән Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһы көс һынашты. Матчта иҫәпте ҡунаҡтар асты һәм тиҙ арала уны 2-гә еткерҙе. Өфө уйынсыһы Дмитрий Макаровтың шайбаһы беренсе осорҙо 1:2 иҫәбе менән тамамларға мөмкинлек бирҙе. Икенсе осорҙа хужалар иҫәпте тигеҙләүгә өлгәште, ләкин ҡунаҡтар сораҡ булып сыҡты һәм мәрәйҙәрен 5-кә еткерҙе.Шулай итеп, иҫәп, "Автомобилист" файҙаһына - 4:5.

"Авангард" менән уйын да юлаевсыларға мәрәй килтермәне. Ҡунаҡтар тәүге осорҙа уҡ өфөләр ҡапҡаһына 2 шайба оҙатты. Икенсе осорҙа хужалар иҫәпте тигеҙләй алды, ләкин өсөнсө осорҙа ҡунаҡтар тағы ла унышҡа өлгәшеп, алға сыҡты. Уйын аҙағына тиклем иҫәп үҙгәрмәне һәм Омск өлкәһе хоккейсылары 2:3 иҫәбе менән еңеү яуланы.

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# УЯН ҺӘМ...

## йәшәй башла!

**1936 йылда Америка яҙыусыһы Дороти Бранд "Wake Up and Live" ("Уян һәм йәшә") тигән китабында баш мейеһе өсөн бер нисә ҡыҙыҡлы күнегеү тәҡдим итә. Улар кешене өйрәнгән мөхитенән сығарыу, икенсе төрлө перспективаларҙы, хатта икенсе төрлө ысынбарлыҡты күрһәтеү, ижади ҡараш талап ителгән ситуациялар тыуҙырыу өсөн тәғәйенләнгән.**

1. Көнөнә 1 сәғәтте бер нәмә лә әйтмәйенсә генә, бирелгән һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар биреп уҙғарығыҙ. Шул уҡ ваҡытта, әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләр һеҙҙе нимәгәләр үпкәләгән йәки кәйефе юҡ, шуға һөйләшмәй тип уйламаһын, үҙегеҙҙе тәбиғи тотоғоҙ. Бер кемгә лә бер ниндәй ҙә иҫкәртеү яһамағыҙ, һеҙҙән мәғлүмәт алырға тырышыусыларға ла иғтибар итмәгеҙ.

2. Көн һайын 30 минут буйына бер предмет хаҡында уйлағыҙ, башҡа нәмәгә әүрәмәгеҙ. Килеп сыҡмаһа, күнегеүҙе 5 минуттан башларға була.

3. 15 минут "мин, миңә, минеке" тигән һүҙҙәр ҡулланмайынса һөйләшергә тырышығыҙ.

4. Кешеләр менән тулған теләһә ниндәй бинаға инер алдынан тупһаһында туҡтап, уның ҙурлығын баһалағыҙ.

5. Яңы танышығыҙ һеҙҙең менән аралашҡанда тик үҙе тураһында ғына һөйләһен, тик быны үҙе һиҙмәһен. Ул саҡ ҡына ситкә тайпыла икән, әңгәмәне кире үҙ юҫығына ҡайтарығыҙ.

6. Маҡтанмайынса, зарланмайынса, әңгәмәсеңдә ялҡытмайынса тик үҙең тураһында ғына һөйләп ҡара.

7. 2 сәғәткә план төҙө һәм уны теүәл үтә.

8. Үҙеңә 12 осраҡлы талап ҡуй, мәҫәлән, 20 саҡрымды йәйәү үтергә, 12 сәғәт ашамаҫҡа, төшкө ашты ғәҙәти булмаған урында ашарға, көнө буйы бер нәмә лә әйтмәҫкә, төнөн йоҡламаҫҡа, ә эшләргә, һ.б.

9. Көн дауамында бөтөн тәҡдимдәргә ыңғай яуап бирергә тырыш.

Яҙыусы билдәләүенсә, был күнегеүҙәр тәү ҡарашҡа ҡыҙыҡ, әммә файҙаһыҙ тойолһа ла, улар тормошоғоҙға төрлө яңы нәмәләр индерәсәк һәм үҙгәрҙе яҡшыра белергә ярҙам итәсәк.

# ЙӨН ЕП ҺЫҘЛАУҘАН...

**Йөн ептең капилляр ҡан әйләнешенә ниндәйҙер йоғонтоһо бар, сөнки шешеү процесы капилляр ҡан әйләнеше яйлангандан башлана. Йөн еп шулай уҡ ҙур булмаған статик электр тогы сығанағы булып тора. Шуға ла ҡулдың беләҙегенә бәйләнгән йөн еп ҡан әйләнешен яҡшырта, ҡулдағы яраларҙы тиҙерәк бөтәштерә, тарамыш тартылғанда ярҙам итә.**

Йөн - иң сәләмәт, гигиеник яҡтан иң таҙа, йылыны көйләүсе материал иҫәпләнә. Уның тәҙөләшө тирегә тын алыуға ҡамасауламай. Бынан тыш, уның шифалы сифаттары ла бар. Борон теш, баш, бил һыҙлағанда уларға йөн баҫҡандар. Етлекмәй тыуған балаларҙы ла һарыҡ йөнөнә һалғандар. Тере һарыҡтан ҡырҡып алынған, йыуылмаған, буялмаған, химик матдәләр менән эшкәртелмәгән йөн хайуан балауыҙы - ланолин менән ҡапланған була. Ланолин йөн ауырлығының 12 процентын тәшкил итә. Был бик ҡиммәтле матдә, косметик майҙарҙың нигеҙе итеп ҡулланыу өсөн уны махсус табалар. Ланолин тән температураһында ирей һәм тирегә үтеп инә. Ул мускулдарға, быуындарға, умыртҡа бағанаһына тәьҫир итә, ауыртыуҙы баҫа, ҡан әйләнешен көсәйтеп ебәрә. Шуға ла йыуылмаған тәбиғи йөндән яһалған түшәктәр юғары хаҡ менән баһалана.

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ЙӘШ ШОҢҠАРҘАР БУЛЫР АҠҺАҠАЛ

**"Киске Өфө" гәзитенең 34-се һанында ағинәйҙәр йыйыны тураһында "Донъя дилбегәһен аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр" мәҡәләһен уҡығандан һуң тыуған уйҙарымды, шиғри юлдарға һалып, уҡыусыларға тәҡдим итергә йөрьәт иттем. Мине тетрәндергәне Вәсилә Садиҡованың ошо юлдары булды:**

**- Ағинәйҙәр һеҙгә әйтәм,**
**Ил тотҡаһы ирҙәр ҡайҙа?**
**Донъя ҡалһа ҡатын-ҡыҙға,**
**Янып әйләнмәсме ҡуҙға?**
**Дилбегәне тотһа улар,**
**Кәрәк саҡта ҡаҡһа ҡулдар,**
**Ил намыҫы - ир намыҫы,**
**Ирһеҙ ҡалһаҡ, Алла ҡарғар!**

Ситкә ҡуйып вики-эшемде,
Уҡып сыҡтым "Киске Өфө"нө.
Унда булған барлыҡ мәҡәлә
Елкендерә минең күңелдә.
Уйландыра һәр бер бүлеге
Кейгәндәргә башҡорт бүреге,
Белгәндәргә бирә фәһемен,
Фекерҙәргә өҫтәп ҡеүәһен.

Ошо һанда сыҡҡан мәҡәлә,
Уйҙарымды тора көрмәләп:
Ағинәйҙәр ауыл ҡотон һаҡлай,
Ир хәстәрен һалып иңенә,
Таштимерҙең "Ҡанлы биле"ндә
Ҡор йыйғандар Урал илендә.
Дилбегәне тотһон аҡһаҡалдар -
Тигән талап улар һүҙендә.

Инҡар итмәй инәй телмәрен,
Йәшермәйсә ирҙең ҡүҙҙәрен,
Дауам итеп уртаҡ уйҙарҙы,
Мин дә теҙәм шиғыр юлдары.

Ихтилал, аслыҡ, һуғыш, хәмер
Милләткә яйлап ҡаҙый ҡәбер.
Ялған оран-ҡотҡо таратып,
"Һин - яугирһың!" тиеп, маһайтып,
Нисә быуат инде ҡан менән
Өҙәләгәс быуын сылбырын,
Ҡырып торғас "һеҙгә-ҡаймағын",
Аҡһаҡалдар илдә ҡалмаған шул,
Аҡһаҡалдар илдә ҡалмаған...

Башҡорт ҡаны менән һуғарылған,
Ер шарының һәр бер ҡитғаһы.
Замананың барлыҡ фетнәһе,
Урап үтмәй милләт "кеҫәһен",
"Батып" үлде күпме әҙәмдәр,
"Коротам!" тип, "аҡбаш" дингеҙен.

Зарланыуҙан булмаҫ фәтеүә,
Кәрәкмәй яттан ярҙам көтөргә.
Батыр васыятына ант итеп,
Яҡшылыҡты менәр ат итеп,
Ил яҙмышын алып ҡулына,
Сығайыҡ беҙ донъя ҡорона,
Емерәйек ҡоршау тарлығын,
Танытайыҡ башҡорт барлығын.

Ирмен тигән ир-зат бурысы:
Сығармаһын ҡындан ҡылысын,
Аҡыл менән япһын ҡапҡаһын,
Яман, әйҙә, ситтә тапанһын,
Асайыҡ һуң милләт асылын,
Ыңғай итеп һәр бер ысулын,
Берҙән ишеп быуат ҡылдарын,
Ялғайыҡ беҙ быуын сылбырын!

Киләсәктә бағлап мул уңышҡа,
Орлоҡ сәсһәк бөгөн мир менән,
Башҡорт иле ҡоромаҫ Уралда,
Илдә тыуыр гәзәл Иләймән!
Донъя дилбегәһен алып ҡулына,
Ғорур атлар Яҡшылыҡ юлынан,
Йәш шоңҡарҙар булыр Аҡһаҡал,
Ил яҙмышын тоғро һаҡларҙар!

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАШТА ҮҘЕҢДЕ...

## унан кешене тикшер

Яман юлдаш яуға ҡалдырыр, яман бей дауға ҡалдырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер илгә бай төбәктә йәшәгән ситтәр килеп, бындағы көнитмештең һәм халыҡтың ярлылығын күргәндәр һәм уларға ярҙам итергә булғандар. Улар был илдәге бар булғанды емереп, үҙҙәренсә төҙөй, үҙгәртә, ерҙә сәскәләр һәм емеш ағастары үҫтерә башлаған. Ләкин был илдең аҫабалары бындай матурлыҡтан, төҙөклөктән ҡасып, тауҙарға күсенеп киткән. Ситтәр уларҙың был ҡылығын иҫәрлеккә һанап, аптыраған, ләкин уларҙы үҙ иркенә ҡуйып, ҡаланы артабан төҙөкләндереүҙе дауам иткән. Әммә бәхет оҙаҡҡа бармаған: ҡапыл ғына йылғаларҙа һыу юҡҡа сыҡҡан, тупраҡ ярыла, тау түбәләре ишелә башлаған. Ярлы булһа ла, үҙенсә йәшәп ятҡан төбәктә үле бушлыҡ, емереклек барлыҡҡа килгән. Бындай бәхетһеҙлеккә төрләсә ҡаршы торорға маташҡан ситтәр, тамам аптырап, тауҙарға юл тотҡан һәм унда аҡһаҡалды эҙләп тапҡан. "Әйт әле, аҡһаҡал, ни өсөн беҙҙең изге ниәттәребеҙ был ергә зарар килтерҙе? - тигән ситтәр аҡһаҡалға. - Беҙ бит үҙ илебеҙҙә бай һәм етеш йәшәйбеҙ, һеҙҙә лә шундай тормош урынлаштырмаҡсы булғайныҡ, ләкин беҙҙең изгелек яуызлыҡҡа әйләнде түгелме?"**

**Аҡһаҡал шулай тип яуаплаған: "Үҙең белмәгәнде үҙгәртергә тырышырға ярамай. Беҙ был ерҙең һыуға бай булмағанын беләә инек, шуға ла һыуҙы күҙ ҡараһындай һаҡланыҡ; тау түбәләренең ишелергә торғанын да белдек, шуға ла үҙебеҙҙең тыныс ҡына, артыҡ тауышланмай йәшәүебеҙ менән уның ныҡлығын тәьмин иттек; ошо тауҙарҙың ерҙе ҡоролоҡҡа килтереүсе елдәргә ҡалҡан булып тороуын да беләә инек, шуға ла тәбиғәттең һәр үҙгәрешенә һиҙгер булып, үҙебеҙҙең йәшәү рәүешебеҙҙе уға ярҡлаштырырға тырыштыҡ. Беҙ был ерҙә меңәр йылдар буйы шулай һаҡлап килдек, уны бала кеүек көйәк ҡәҙерләп кенә бер быуындан икенсеһенә тапшырҙыҡ. Уның серҙәре лә бер быуындан икенсеһенә телдән телгә күсте. Беҙ был ҡырыҫ ерҙә үҙебеҙҙең бәхет һәм байлыҡ өсөн түгел, ә уны ҡотҡарыу, һаҡлау өсөн йәшәнек. Байлыҡ көҫәгән, башҡаларҙың мәнфәғәтенә һуҡыр, һаңғырау, аяуһыҙ булған ситтәр генә яулап алынғандың серен дә, ҡәҙерен дә белмәй. Үҙеңдеке булмаған ерҙәрҙә баҫып алыу, хатта изге ниәттән булғанда ла, баҫып алыусының үҙенә лә изгелек килтермәҫ, ул ерҙәге быға тиклемге тормошто ла бөлдөрөр. Быңа һеҙҙең изге ниәттәрегеҙ ҙә беҙҙең өсөн яуызлыҡҡа әйләнде. Тимәк, һәр изге ниәт тә изгелек түгел..."**

**...Эйе, ҡылынған изгелек бераү өсөн - изге, икенсе өсөн яуызлыҡ булыуы ла бар. Шуға ла кемгәләр изгелек эшләр алдынан ул кешенең һинең изгелегенә мохтажмы, түгелме икәнен белеш. Көсләп тағылған изгелектең көсләү булыуы ла бар..."**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "ИКЕ ЛӘ ГЕНӘ ЕГЕТ"




**10 сентябрҙә Өфөлә Актерҙар йортонда йәш режиссер Таңсулпан Бураҡаеваның "Ике лә генә егет" тип аталған фильмының презентацияһы үтә.**

Картина "Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән һәм киностудияның юбилей саралары сиктәрендә "Родина" кинотеатрында беренсе тапҡыр күрһәтелгәйне инде. Кино нигеҙендә XIX быуат аҙағында йәшәгән Урал арьяғы башҡорттары тормошо сағыла. Ике ҡарт бер арбала Ырымбурға бәхәстәрен судта хәл итергә китеп бара һәм юлда барғанда ҡасандыр яҡын дуҫтар булыуҙарын хәтергә төшөрә.

"Был фильм - Санкт-Петербург кино һәм телевидение институтындағы диплом эшем, - ти режиссер. - Киноны айырым презентациялауҙың сәбәбе шунда: һәр картина, тулы метрлымы ул, әллә ҡыҫҡамы, ҙур ижади һәм финанс сығымдар, энергия һәм энтузиазм һалыуҙы талап итә. Шуға ла фильмды төшөрөүҙә әүҙем ярҙам күрһәтеүселәр һәм, әлбиттә, башҡорт киноһын һөйөүселәр йыйыласаҡ".

Фильмдың презентацияһында тарихи костюмдар коллекцияһын күрергә, арбала фото төшөргә, талкан менән сәй эсергә мөмкин буласаҡ. Тамашасы төп ролде башҡарыусылар - Башҡортостандың халыҡ артисы Раиул Гәлин һәм Зиннур Байбулатов, шулай уҡ төшөрөүселәр командаһы - режиссер Таңсулпан Бураҡаева, оператор Илсур Ишаев, рәссам Евгений Крупин, композитор Урал Иҙелбаев менән аралаша аласаҡ. Сара Башҡортостан кинематографистары берлеге ярҙамында үткәрелә.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# МӘМЕРЙӘЛӘ ТАРИХ ҺАҠЛАНА

**Нөгөш һыуһаҡлағысынан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан мәмерйәлә ғалимдар ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан хайуан һөйәктәрен һәм боронғо кешенең ҡоралдарын тапҡан.**

Биш йыл элек урындағы халыҡ ошо мәмерйәлә бурһыҡтарға һунар иткәндә ниндәйҙер һөйәктәр ятыуы тураһында ғалимдарға хәбәр итә. Тикшереүҙәр барышында, былар кәм тигәндә 30 мең йыл элек йәшәгән мәмерйә айыуының һөйәктәре булған, тигән һығымта яһалған. Хайуандың баш һөйәге һөңгә менән тишелгән. Ә бит быға тиклем Уралда йәшәүсе боронғо кешеләр айыуҙарға һунар итмәгән, тип иҫәпләнгән! Ғалимдар әйтеүенсә, был мәмерйә ҡаҙыу эштәре менән шөғөлләнеү өсөн бик уңайһыҙ. Уның ауыҙы бер метр ғына тарлыҡта, ә ҡыуышы бишкә алты метрлыҡ киңлектә, бейеклеге дүрт метрға яҡын. Мәмерйәлә усаҡ яғып булмай, ул йәшәү өсөн тәғәйенләнмәгән, һөңгө башаҡтарынан тыш, башҡаса кеше эҙҙәре лә юҡ, шуға күрә мәмерйә ҡорбан килтереү урыны булғандыр, тигән фараздар әйтелә. Иң ҡыҙығы, ошо ҙур булмаған мәмерйәнән 40 мең йыл элек юҡҡа сыҡҡан биш гигант мәмерйә арыҫланы һөйәге табылған. Быға тиклем донъя буйынса табылған гигант мәмерйә арыҫланы һөйәге бер урында ғына осраған. Сөнки "мәмерйә арыҫланы" тип аталһа ла, был хайуандар иректә, ҡырҙа йөрөгән, мәмерйәлә генә йәшәү уларға хас түгел. Гигант мәмерйә арыҫланының тән төҙөлөшө ҡеүәтле, аяҡтары алыҫ араларҙы тиҙ үтеү өсөн яраҡлашҡан һәм оҙон булған. Хәҙерге арыҫландарҙан айырмалы рәүештә, уларҙың ялы булмаған, ә бына кәүҙәләре 1,5 тапҡырға ҙур, хайуандар тундраны хәтерләткән һыуыҡ шарттарҙа йәшәүгә яраҡлашҡан. Ғалимдар әйтеүенсә, был һөйәктәр 40 мең йылдан да алдараҡ йәшәгән хайуандар булыуы мөмкин. Әлеге көндә мәмерйәлә табылған бөтә һөйәктәрҙе егерме йәшниккә һалып, Екатеринбург ҡалаһына тикшереүгә ебәргәндәр.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Лэйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4061